✓ ***ИҒТИБАР! Уҡыусыларыбыҙҙы 6 ноябрҙә 19 сәғәттә баш ҡаланың "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына саҡырабыҙ: унда "Киске Өфө" гәзите ойошторолоуҙың 10 йыллығына арналған ижад кисәһе үтәсәк. Сценарий авторы Зөһрә Бураҡаева менән режиссер Хөрмәт Үтәшев, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары тарафынан әҙерләнгән матур тамашала көтөп ҡалабыҙ.***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10 йыл

20 - 26 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№42 (512)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Һәйкәлдәр тарих һаҡлай

4

Ир-егеттең көсө...

6-7

Һаулығыңды һаҡлау...

8-9 табиптың ғына түгел, үҙеңдең дә бурыс

Ишан исемендәге мәсет

12-13

14 ТВ-программа











ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн үҙеңдең матди хәлеңде нисек баһалайһың - байһыңмы, урта хәллеһеңме, әллә фәҡирһеңме?

***Илдар ҒӘБИТОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ уҡытыусыһы:*** Росстат мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә бөгөн айлыҡ йәшәү минимумы 6 385 һум тәшкил итә. Бер йыл элек был күрһәткес 120 һумға күберәк ине. Белеүебеҙсә, йәшәү минимумы өлкән йәштәгеләр пенсияларының, аҙ тәьмин ителеүселәр һәм балалар пособиеларының, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләнеүсе субсидияларҙың күләменә туранан-тура йоғонто яһай. Ә бит минимум күләме күберәк булған һайын, мохтажлыҡ кисереүселәр тарафынан дәүләт ярҙамы алыусылар һаны ла күберәк булыр ине. Рәсәй Президенты В.Путиндың Дәүләт советы ултырышында яһаған сығышынан күренеүенсә, бөгөн илдә килемдәр айырмалығы "юл ҡуйғыһыҙ дәрәжәлә ҙур", граждандарҙың 13 проценты (18 млн.) һаманға тиклем фәҡирлек сигендә көн күрә. Икенсе сығанаҡтар буйынса, мәҫәлән, Рәсәй Фәндәр академияһының Иҡтисад институты директоры Руслан Гринберг билдәләүенсә, фәҡирҙәр һаны беҙҙә 30 миллионға барып баҫа һәм тағы ла шул тиклеме тинен тингә ялғап йәшәүгә дусар ителгән, сөнки хаҡтар көнләп түгел, сәғәтләп үҫә барһа ла, уртаса айлыҡ эш хаҡы бик түбән кимәлдә ҡала килә. Социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, кешенең ябай ғына көндәлек төп ихтыяждарына яуап бирерлек лайыҡлы эш хаҡы 32 мең һум тәшкил итергә тейеш, тип ҡарала, ә беҙҙә ул әлегә ни бары 18 мең һум (бының да түңәрәкләп, уртаса итеп алынған һан икәнлеген иҫкә төшөрһәк, күптәрҙең айлыҡ эш хаҡы 5-10 меңдән артыҡ булмауы ла мәғлүм). Быны ошо етешмәгән айырманы (14мең) кеше барыбер төрлө юлдар менән алырға тырыша. Шул арҡала килеп тыуа ла инде һәр төрлө кире күренештәр (ришүәт, урлашыу һ.б.). Эш хаҡы түбән булғас, күптәрҙең эшләгеһе килмәй. Беҙҙең илдә типһә тимер өҙәрҙәй 8 миллион ир-егет эшләмәй ята, улар урынын гастарбайтерҙар биләй. Рәсәйҙәге социаль тигеҙһеҙлек шунда бигерәк тә асыҡ күренә: 10 процент тәшкил итеүсе байҙар ҡатламы эш хаҡын ярлыларҙан 16 тапҡырға күберәк ала. Был йәмғиәттә социаль көсөргәнешлек тыуҙыра, эшкә теләк кәмей, ижади инициатива һүнә, стимулдар юғала. Владимир Путиндың Президент һайлауҙары алдынан эш хаҡын арттырыу хаҡындағы вәғәҙәһен министрҙары үтәмәй, сөнки беҙҙең илдә бөтә власть байҙар ҡулына күсеп бөттө. Эш кешеһе мәнфәғәттәрен ҡайғыртыусы берәү ҙә ҡалманы, хатта профсоюздар ҙа. Үҙемдең хәлгә ҡағылышлы шуны әйтер инем: эш байлыҡ, аҡса күплектә лә тормай. Күп кеше хәҙер аҡса ҡолона әүерелде. Федераль дәүләт статистика хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса ярлы ҡатламға ҡараһам да, үҙемде ярлы тип иҫәпләмәйем, күңелемә яҡын, яратҡан эштәрем менән шөғөлләнәм, ижад өлкәһен үҙ итәм. Ғаиләм, үҙем иҫән-һау булып, балаларҙы аяҡҡа баҫтырырға насип итһен, тип теләйем. Бәхет аҡсала түгел.

***Зәкир Ишмырҙмн Ғафури районы, Сәйетбаба ауылынан пенсионер:*** Йыш ҡына, бөгөн ауыл халҡына йәшәүе еңелерәк, сөнки уға шәхси хужалығы ярҙамға килә, тигәндәрен ишетергә тура килә. Дөрөҫ, уңған кеше ҡайҙа ла әмәлен таба. Байып уҡ китмәһә лә, урынлы-урынһыҙға зарланып, меҫкенләнеп тә ултырмай, яйын табырға, ғаиләһен тәьмин итергә тырыша: мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫырап, баҡса үҫтереп донъя көтә. Шул уҡ ваҡытта ауылды күтәреү өсөн был ғына етмәй, халыҡты даими эш менән тәьмин итерҙәй ҙур хужалыҡ һәм ойошмалар кәрәк. Мәҫәлән, фермер хужалыҡтары тураһында күпме һөйләйбеҙ, ләкин бер нәмә лә буш урында барлыҡҡа килмәй бит. Нығынып, аяҡҡа баҫып китһен өсөн улар дәүләт ярҙамына мохтаж, ләкин беҙгә субсидия түләмәйҙәр. Әйтеүемсә, ауыл халҡы бирешмәҫкә, үҙ йүнен үҙе күрергә тырышып ята ла бит, тик мал аҫырауы ла хәҙер бик ҡыйынға төшә: мал аҙығы ла, көтөүлеге лә, сабынлығы ла кәрәк. Һуйып, итен һатам, тиһәң, тағы проблема. Хәләл көс түгеп үҫтергәнде аралашсыларға арзанға биреп ебәрге лә килмәй. Шунлыҡтандыр, күрәһең, ауылда йәшәгәндәрҙең дә бәғзеләре мал аҫырамай башланы. Өлкән йәштәгеләрҙең хәле аңлашыла: уларҙың мал ҡарарлыҡ ҡарыуы ҡайтҡан, бер пенсияларына ҡарап ҡалдылар. Унының да уртаҡлашыусы етерлек: балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен аҫырарға мәжбүрҙәр шул ғына пенсия аҡсаһына. Ошо әйтелгәндәрҙән сығып, ауыл халҡын бер ҙә генә хәлле, хатта урта хәлле тип тә әйтергә тел әйләнмәй. Ярлылар беҙ, фәҡирҙәр күп арабыҙҙа. Тарих тәгәрмәсе кирегә әйләнәме әллә, юғиһә?..


**(Дауамы 2-се биттә).**


"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# ҺИНҺЕҘ НИСЕК ЙӘШӘГӘНМЕН?

**"Киске Өфө" гәзитен ул нәшер ителә башлаған йылдарҙан алдырып уҡыйым. Хәҙер аптырап та китәм: элек, ул әле сыҡмаған саҡтарҙа, нимә уҡып, ниҙәр уйлап йәшәнем икән?**



Ни бары тиҫтә йыл эсендә "Киске Өфө" беҙҙең, башҡорт теле уҡытыусыларының, алдынғы ҡарашлы милли интеллигенциябыҙ вәкилдәренең генә түгел, ә үҙ халҡы яҙмышына, уның ҡанлы ла, данлы ла тарихына, бишек йырылай моңло теленә , йөҙөк ҡашылай зиннәтле мәҙәниәтенә битараф булмаған, эсендә йәне һәм дә рухы булған һәр илһөйәрҙең яратҡан гәзитенә әүерелде, бик күп мәсьәләләргә ҡарашыбыҙҙы киңәйтте, йәшәйһе йылдарыбыҙ, бараһы юлдарыбыҙ алдында яңы офоҡтар асты.

Халҡыбыҙ тарихы быуаттар төпкөлөндә бөгөнгө уҡыусыға билдәле булмаған әллә күпме серҙәр һаҡлай. "Киске Өфө" аҫыл ынйылар сүпләгәндәй, берәмтекләп, ана шул тарих ярсыҡтарын ҡәҙерләп йыя, бөгөнгөбөҙҙө һаҡларға, матур, ҡотло донъя ҡороп йәшәргә, тормош ауырлыҡтары алдында ҡаушап, баҙап ҡалмаҫҡа өйрәтә. Мин айырыуса арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ойошторолған әңгәмә-диалогтарҙы, монологтарҙы ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Туған телебеҙҙе һаҡлау, йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү мәсьәләләрен яҡтыртҡан мәҡәләләр ҙә яҡын күңелемә, быларын мин үҙ эшемдә файҙаланам. Әлдә һин бар донъяла, рәхмәт һиңә, гәзитем!

**Светлана ИҪӘНҒОЛОВА,**
**башҡорт теле уҡытыусыһы,**
**"Остаз" интернет журналы мөхәррире.**

✓ Уҡытыусы менән табипҡа ҡарағанда дәүләт өсөн уның үҙ аппарат чиновниктары ҡәҙерлерәк, күрәһең. Республика чиновниктарын аҫырау сығымдарын хатта ки быйыл уҡ 600 миллионға тиклем арттырыу ҡарала.



БАШ ЙОРТТА...



# ЯМҒЫР ЯУҒАНДА...
## урамға сыҡмау хәйерле

**Өфө, ысынлап та, күҙгә күренеп үҫә, матурлана бара. Хатта баш ҡалабыҙға килгән ҡунаҡтар ҙа уның күркәмлегенә һоҡлана. Ләкин ыңғай күренештәр менән бер рәттән, киреләре лә осрай һәм күңелде ҡыра.**

Иғтибар итһәгеҙ, быйыл ҡара яҙҙан алып юлдарҙы киңәйтеү эштәре алып барылды. Шул сәбәпле урамдарҙың бер өлөшө, тротуарҙар күпмелер ваҡытҡа ябылып та алды. Әлбиттә, был кәрәкле һәм мөһим эш, әммә йөрөр юлдар урыны-урыны менән балсыҡ, тупраҡ ҡатнашмаһына әйләнеп, ямғыр яуғанда бутҡаға әйләнеп, күңелде ҡырҙы. Өҫтәүенә, ремонт барған урында эшселәр бигерәк яй ҡыбырлай. Күп ваҡытта уларҙың эшһеҙ ултырғанына шаһит булырға тура килә.

Һәм тағы. Өфөбөҙгә хас күренеш был: күктең төбө тишелгәндәй ярты сәғәт ямғыр ҡойһа, урамдарҙан аша үтерлек тә булмай. Шуға ла күп ваҡыт күләүектәр аша ғына түгел, даръя булып аҡҡан һыу кәртәһе аша тас та тос сығырға тура килә. Бәлки, арыраҡ сыға торған урын барҙыр, тип, саҡ ҡына булһа ла "асфальт утрауы" күренгән ҡалҡыу урын эҙләп йөрөү ҙә файҙаһыҙ - "даръя" бордюрҙар буйлап буйынан-буйына алҡынып ағып ята. Шуға ла ямғыр яуғанда урамға сыҡмау хәйерлерәк.

Был күренеш бер бөгөн генә барлыҡҡа килмәгән. Ул электән бар, әммә ямғырҙар ваҡытында граждандар аяҡтарын һыуламай ғына тәғәйен урынына барып етһен өсөн бер ниндәй ҙә сара күрелмәй. Хатта бер ваҡыт шундай һүҙҙәр ҙә йөрөнө, имеш, Салауат Юлаев проспектын төҙөгәндә юл эшләүселәр унда һыу ағыу ҡоролмаларын эшләп ҡалдырырға "онотҡан". Шунлыҡтан, ямғырҙар башланһа, проспект буйлап урыны-урыны менән "даръя" аға, ә ҡапыл һыуытып ебәрһә, был юлдар көҙгө кеүек ялтырап, боҙлауыҡҡа әйләнә икән. Был хаҡта, әлбиттә, "тимер ат" хужалары яҡшыраҡ хәбәрҙарҙыр.

Ямғырҙан һуң барлыҡҡа килгән даръяларҙы баш ҡаланың һәр урамында күрергә мөмкин. Был юл төҙөүселәрҙең алдан күрә белмәү бәләһеме, әллә һыу ағыу торбаларын бер-береһенән алыҫ ҡуйыуҙың үҙенең нормаһы бармы - ябай гәзит уҡыусыға ҡараңғы. Тик көҙгө-яҙғы ямғырҙар ваҡытында хатта автобус туҡталыштарында ла транспорттан туп-тура күләүек уртаһына төшөп ҡалыу бер ҙә генә ҡыҙыҡ түгел...

**Шәрифә САДИҠОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бөгөн үҙеңдең матди хәлеңде нисек баһалайһың - байһыңмы, урта хәллеһеңме, әллә фәҡирһеңме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Венера ИБРАҺИМОВА, медицина хеҙмәткәре:*** Был һорауға үҙем өсөн генә яуап бирһәм дә, башҡаларҙың хәле лә әллә ни шәптән түгелдер, моғайын. Ғүмерем буйы кеше сәләмәтлеге һағында намыҫлы хеҙмәт итеүемә ҡарамаҫтан, мин - фәҡир. Бөгөнгө көндә илебеҙҙә иң кешелекле, иң изге һөнәр эйәләре иҫәпләнгән уҡытыусы менән табип йәмғиәтебеҙҙең иң ярлы ҡатламына ҡарай булып сыға. Әйткәндәй, әхирәтем - уҡытыусы. Уның фекере менән килешәм, ә бына нимә ти ул: "Хәҙер балалар тәртипһеҙ, тупаҫ, уҡытыусыны тыңламайҙар һәм, ғөмүмән, уны бер кемгә лә һанамайҙар, тип зарланыусылар күп. Бәй, нишләп шулай булмаһын - тәү сиратта үҙ иле, дәүләте тарафынан үгәйһетелеп, ситкә тибәрелгән уҡытыусыны башҡалар ниңә кешегә һанларға тейеш һуң?! Әлбиттә, элгәре уҡытыусыны эшенә, һәләтенә ҡарап баһалалар, ә хәҙер бит кемдең кеҫәһе ҡалын, шул абруй икәнлеге хатта балалар өсөн дә сер түгел". Әйтеүемсә, медицина хеҙмәткәрҙәренең хәле лә маҡтанырлыҡ түгел. Яңыраҡ интернеттағы бер рәсми сайтта шундай мәғлүмәткә тап булдым: Башҡортостанда һәр 6-сы медицина хеҙмәткәре фәҡирлек сигендә йәшәргә мәжбүр, ә ғаиләләрҙең ярлылыҡ кимәле буйынса беҙҙең республика Рәсәйҙә 47-се урында килә. Уҡытыусы менән табипҡа ҡарағанда дәүләт өсөн уның үҙ аппарат чиновниктары ҡәҙерлерәк, күрәһең. Республика чиновниктарын аҫырау сығымдарын хатта ки быйыл уҡ 600 миллионға тиклем арттырыу ҡарала. Эйе, мин фәҡир, тип оялмайынса ҡабатлай алам, сөнки көнөтөнө эшләп йөрөүсе миңә оят түгел, ә мине ошондай хәлгә төшөргән дәүләткә, уның әлеге майҙа йөҙгән чиновниктарына оят булһын. Эш хаҡым 15 мең, яңғыҙым ике бала тәрбиәләйем. Ирем эскегә бирелгәс, айырылырға мәжбүр булдым, алимент түләмәй, сөнки бер ерҙә лә эшләмәй. Ошо көндәрҙә матбуғатта Рәсәйҙең киләһе йыл бюджеты проекты буйынса эксперт күҙәтеүҙәре баҫыла. Материалдарҙан күренеүенсә, һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә сығымдар 18 процентҡа ҡыҫҡартыласаҡ икән. Быны нисек аңларға? Халыҡ һаулығы иҫәбенә экономияларға йыйыныумы был? Ә бюджет хеҙмәткәрҙәренә вәғәҙә ителгән эш хаҡын арттырыу бурысы иһә төбәктәр ҡарамағына ауҙарыласаҡ. Бынан ни килеп сығыры ла билдәһеҙ. Ярай әле РФ Президенты бер нисә министрҙы "келәмгә баҫтырып" шелтәләп алғандан һуң бюджет проекты еренә еткереү өсөн кире ҡайтарылды. Ләкин нигеҙҙә әҙер булған был документҡа эшлекле генә төҙәтеүҙәр өҫтәлерме икән һуң? Ышаныуы ҡыйын...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Өфө ҡалаһы Ленин районының башҡорт һәм татар телдәре уҡытыусылары.

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

• 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була.** Октябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

• Ә сентябрҙә был бүләктәр ошо уҡыусыларыбыҙ өлөшөнә сыҡты: **М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** - Әбйәлил районы Үтәгән ауылынан Ҡасим Йәһүҙинға, Стәрлебаш районынан Рима Мәһәҙиеваға, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Мәрйәм Һатыбаловаға, Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан Зифа Ғүмәроваға; **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китабы** - Баймаҡ ҡалаһынан Исмәғил Фәизовҡа, Саҡмағош ауылынан Музаяна Ғүмәроваға, Өфө ҡалаһынан Ләйсән Сәйфуллинаға, Учалы районынан Әҙилә Ғәйетҡоловаға, Әбйәлил районынына Әнүәрә Хәйбуллинаға, Өфө ҡалаһынан Ф. Көсөкҡоловаға, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Суринға, Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Сәләх Сәлиховҡа, Ғафури районы Бурлы ауылынан Гөлсөм Туҙбәковаға, Мәсетле районы Йонос ауылынан Сәғиҙә Мөхәрәмоваға.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда алданған өлөшсөләр мәсьәләһе 2013 йылда хәл ителәсәк. Был хаҡта республика Президенты Рөстәм Хәмитов Өфө округы хакимиәтендә үткән кәңәшмәлә хәбәр итте. Ҡала мэрияһына ул проблемалы объекттарҙы ҡарап сыҡҡандан һуң килде. Республика башлығы билдәләүенсә, Өфөлә ҡалған проблемалы йорттарҙы төҙөп бөтөү өсөн (ә улар бөгөнгө көндә унау) яҡынса ике-ике ярым миллиард һум аҡса талап ителә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 56-сы ултырышы 24 октябрҙә үтә. Депутаттар ҡырҡҡа яҡын республика закон проектын тикшерергә планлаштыра. Уларҙың унауһы закон статусын аласаҡ. Шулай уҡ янғын хәүефһеҙлеге, йорт хайуандары, физик культура һәм спорт, мәғарифҡа ҡағылышлы закон проекттары буйынса эшләү тәҡдим ителәсәк. Депутаттар иғтибарына тәүгә 25-кә яҡын закондар сығарыу башланғысы тәҡдим ителәсәк.

✓23 октябрҙә Башҡортостанда Эшҡыуарҙар хоҡуҡтары буйынса вәкил Рафаил Ғибәҙуллин РФ Президентының республикалағы йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһендә граждандар менән осраша. Граждандар Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 100 адресы буйынса 14 сәғәттән алып 16-ға тиклем ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефондар: 8(347) 251-77-91, 251-64-39, 280-85-45.

✓Мәктәп автопарктары яңы автобустар менән тулыланды - "ПАЗ" маркалы автобустар аҫҡыстары Бишбүләк, Благовар, Благовещен, Бүздәк, Борай, Ғафури, Дыуан һәм Мәсетле райондары мәктәптәренә тапшырылды. Яңы уҡыу йылы башынан алып райондарға йәмғеһе 96 машина бүленгән. 2012 йылда ауыл мәктәптәре өсөн автотранспорт һатып алыуға федераль бюджеттан 204 миллион һум аҡса бүленгән. Был аҡсаға республиканың 63 районы өсөн 96 автобус һатып алынған. 2012 йыл аҙағынаса йәнә 85 мәктәпте яңы транспорт менән тәьмин итеү планлаштырыла.

✓Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология факультеты Йәш психолог мәктәбе ойоштора. Ағымдағы уҡыу йылы барышында унда 9-11 синыф уҡыусылары йөрөй ала. Психология менән таныштырыу, үҫмерҙәргә психологик ярҙам күрһәтеү курстарҙың төп маҡсаты булып тора. Дәрестәргә йөрөү бушлай. Өҫтәмә мәғлүмәт менән (347)251-70-56 телефоны аша танышырға була.

✔ *Был донъяла бәхетле булыуың мөһим түгел, үҙеңде бәхетле итеп тойоуың мөһим. Йәғни тулы бәхет шарттарында йәшәүсе түгел, үҙен бәхетле итеп тойоусы ысын мәғәнәһендә бәхетлелер.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# КЕШЕНЕ БӘХЕТ АЙЫРА

**Һеҙҙең бәхетле тормош хаҡында берәр фильм ҡарағанығыҙ йә китап уҡығанығыҙ бармы? Ғөмүмән, күп кенә фильмдарҙың йә әҙәби әҫәрҙәрҙең аҙағы геройҙарҙың ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, бәхетле тормош төҙөүе, туйҙары менән тамамлана. Кемдер берәү башҡаларҙың бәхете өсөн һәләк була, уны һуңғы юлға оҙаталар, ерләүселәр араһында артабан бәхетле тормош менән йәшәп китеүселәр ҙә бар. Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙең һәм фильмдарҙың аҙағында шундай һүҙҙәр ҙә әйтелә: "Улар бәхетле ғүмер кисереп, оҙон-оҙаҡ бергә йәшәнеләр ҙә, бер үк көндә, бер үк сәғәттә донъя ҡуйҙылар..."**







Ошо һөйләмдең "бәхетле ғүмер кисереп" тигән өлөшөн экранда йә әҙәби әҫәрҙә нисек итеп һынландырырға була икән һуң? Әйтәйек, улар бәхетле, күңелдәре тыныс, өҫтәре бөтөн, тамаҡтары туҡ, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре лә шатлана... Артабан нимә? Ҡыҫҡаһы, бәхетле тормош хаҡында бер нәмә лә яҙып һәм фильм төшөрөп булмай, ни өсөн тигәндә, әҫәр, фильм йә тормоштон үҙе проблемалар барлыҡҡа килгәс, йәғни геройҙар бәхетһеҙлек менән осрашҡас ҡына башлана.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып ниндәй һығымта яһарға була: бәктиһәң, бәхет кисереп йәшәү ни тиклем генә ымһындырғыс һәм зауыҡлы булып тойолмаһын, бик үк ҡыҙыҡлы түгел икән дә. Шулай булғас, ниңә әҫәр йә фильм геройҙары үҙҙәренең бәхете өсөн ҡырылмаһа ҡырҡ ҡаршылыҡтарҙы вата-емерә, үҙен йә яҡындарын ҡорбанға килтереп, эт ҡарағыһыҙ хәлгә етеп, ҡаратырышланып көрәшә икән һуң? Ни өсөн бәхетле тормош ҡыҙыҡлы түгел? Минеңсә,"Кешене бәхет айыра" әйтеменең бер аңлатмаһы тап ошонда яталыр, йәғни, әгәр ҙә бәхет миҙгеле оҙаҡҡа һуҙылһа, был хәл кешене һәлкәүләндерә, ҡанын ойота, аңын йоҡлата һәм кеше башҡалар күҙлегенән бәхетле булып күренгән мәленең ҡәҙерен онотоп, үҙенән-үҙе бәхетһеҙлек көҫәй башлай. Һөҙөмтәлә ул үҙен бәхетле иткән мөхиттән, яҡындарынан айырыла. Тағы ла шуныһы: кеше ошо юлға бармайынса тороп, бәхетле мәленең ҡәҙерен дә белергә һәләтле түгел. Шул уҡ ваҡытта ул бәхеткә ынтылмайынса ла йәшәй алмай. Бында бәхеттең ике сифаты хаҡында һүҙ йөрөтөү урынлы булыр һымаҡ. Тәүгеһе - ҡәҙере беленгән, икенсеһе - бәхетһеҙлеккә килтереүсе, кешене бәхет мөхитенән айырыусы бәхет.

Бәхет хаҡында шундайын матур һәм оло кинәйәле әкиәт бар. Имеш, бер мәл Бәхет урман буйлап китеп барғанында яңылыш соҡорға ҡолап төшкән. Нисек сығырға белмәй илап ултырғанында соҡор янынан үтеп барған кешегә:

-Игелекле кеше, мине соҡорҙан сығырға ярҙам итһәңсе? - тип ялбарған Бәхет.

-Буштың атаһы үлгән, һин миңә бының өсөн нимә бирерһең һуң? - тип һораған кеше.

-Әйт, һиңә нимә кәрәк һуң? - тип һорауға һорау менән яуап биргән Бәхет.

-Минең дингеҙ янында урынлашҡан матур һәм ҙур йортта йәшәгем килә, - тигән кеше.

Шул саҡ мөғжизәле күренеш асылған: диңгеҙ ярында ҙур һәм матур йорт хасил булған. Кеше үҙ күҙенә үҙе ышанмайынса, йортҡа йүгереп инеп киткән. Шунда йәшәй ҙә башлаған һәм Бәхеткә ярҙам итергә кәрәклеген иҫенән сығарған.

Соҡор эсендә ултырып ҡалған Бәхет баяғынан да ҡыҫҡырыбыраҡ иларға, ялбарырға тотонған. Шул саҡ соҡор янынан тағы ла бер кешенең үтеп барғаны күренгән.

-Игелекле кеше, мине соҡорҙан тартып сығарһана? - тип инәлгән уға Бәхет.

-Мин һине тартып сығарырмын да ул, ә бының өсөн һин миңә нимә бирерһең һуң? - тип һорауына һорау менән яуаплаған икенсе кеше.

-Ә һиңә нимә кәрәк һуң? - тип йәнә һораған унан Бәхет.

-Миңә төрлө-төрлө маркалы ҡиммәтле матур машиналар кәрәк, - тигән уға икенсе кеше.

Шул саҡ кеше янына күҙҙең яуын алырлыҡ, береһенән-береһе "текәрәк" машиналар теҙелеп киткән. Кеше машиналарға ултырып, ҙур тиҙлектә йөрөргә тотонған һәм соҡорҙа ултырған Бәхетте бөтөнләй иҫенән сығарған.

Инде соҡорҙан сығырына тамам өмөтөн өҙгән Бәхет тағын бер кешенең үтеп барғанын күреп ҡалып:

-Игелекле кеше, зинһар өсөн мине соҡорҙан тартып сығар әле? - тип уға ялбарған.

Был кеше уны соҡорҙан тартып сығарған да, юлын дауам иткән. Бәхет уның артынан ҡыуып еткән.

-Мине ҡотҡарғаның өсөн һиңә нимә бирәйем, игелекле кеше? - тип өндәшкән уға Бәхет.

-Миңә бер нәмә лә кәрәкмәй, - тип яуаплаған да был кеше юлын дауам иткән. Шулай итеп Бәхет шул мәлдән алып ошо кешенең артынан ҡалмай эйәреп йөрөй икән. Бәхет хаҡындағы иң ҡыҫҡа һәм иң фәһемле әкиәт был, шулай бит, дуҫтар?

Бәләкәй саҡта әсәйҙәр сепарат әйләндергәндә беҙ күбек ялай торғайныҡ. Күбек тәмле генә һымаҡ булып тойолһа ла, төйөрөм ризыҡ булмаһас, уны ялағандан һуң күңелдә ымһыныу тойғоһо ғына тороп ҡала торғайны. Ҡыҫҡаһы, күбек ялап, тамаҡ туйҙырып булмай. Үкенескә күрә, күбек ул һөт тә, ҡаймаҡ та түгел, бары тик боролғандан һуң ағып төшкән һөттөң быу тулған тулҡынсыҡтары ғына. Ғәжәп, ә бит ошо күбекте лә бәхеткә ынтылыу хисе менән сағыштырып була. Ни өсөн тигәндә, һөт эскәндән йә ҡаймаҡ ашағандан һуң һауа менән тулған һөт күперектәренә әйләнеп тә ҡарамайһың. Был осраҡта һөткә, ҡаймаҡҡа тейенеүҙе бәхетле булыуға тиңләһәк, күбек ялау бәхеттең һағымы, иллюзияһы ғына. Бәхет тә ана шулай хыял кимәлендәге иллюзия, һағыш булған сағында ғына ҡәҙерлелер, тим. Һәр хәлдә, мин Бәхет хаҡындағы әкиәттән шуны аңланым. Был донъяла бәхетле булыуың мөһим түгел, үҙеңде бәхетле итеп тойоуың мөһим. Йәғни тулы бәхет шарттарында йәшәүсе түгел, үҙен бәхетле итеп тойоусы ысын мәғәнәһендә бәхетлелер. Бәхет хаҡындағы һүҙҙе тамамлап, билдәле кешеләрҙең бәхет хаҡындағы ҡанатлы һүҙҙәрен килтереү урынлы булыр ине, улар юғарыла әйтелгәндәрҙе тәрәнерәк аңларға ярҙам итер, тип ышанам:

● **Гераклит Эфесский:** "Әгәр ҙә бәхетле булыуҙы тән ләззәте тип кенә аңлаһаҡ, беҙ борсаҡ ашаған үгеҙҙәрҙе иң бәхетлеһе тип атар инек".

● **Оскар Уайльд:** "Беҙ бәхетле саҡта мәрхәмәтле, әммә мәрхәмәтле саҡта һәр ваҡыт бәхетле түгелбеҙ".

● **Лао-Цзы:** "О, бәхетһеҙлек ! Ул бәхеттең нигеҙен тәшкил итә. О, бәхет! Уға бәхетһеҙлек йәшеренгән. Уларҙы кем айырғаны бар икән? Улар икеһе лә даими түгел".

● **Хелен Келлер:** "Бәхеттең бер ишеге ябылғанда, икенсеһе асыла. Әммә беҙ ябылған ишеккә оҙаҡ ҡарап тороп, асылғанын күрмәйбеҙ".

● **Джордж Бернард Шоу:** "Мин бәхетле, сөнки минең бәхетһеҙлек хаҡында уйланырға ваҡытым юҡ".

● **Джордж Гордон Байрон:** "Бәхеткә өлгәшеүсе икенсе берәү менән бәхетен бүлешергә тейеш. Ул сағында бәхеттең игеҙәге барлыҡҡа килә".

● **Силован Рамишвили:** "Әгәр ҙә даға бәхет килтерһә, аттар барыһынан да бәхетлерәк булыр ине".

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 41-се һанда).**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✔Силәбе өлкәһенең "Башҡорт ҡоролтайы" йәмәғәт ойошмаһы һәм уның Магнитогорскиҙағы бүлексәһе менән Магнитогорск ҡалаһы хакимиәте араһында башҡорт милли мәҙәниәтен һәм туған телде үҫтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге Тулы хоҡуҡлы вәкиле Амур Хәбибуллин һәм Магнитогорск башлығы Евгений Тевтелев билдәләүенсә, әлеге килешеү ярҙамында ҡала хакимиәте эшмәкәрлеге төбәк-ара хеҙмәттәшлек итеү һәм үҙ-ара килешеп эшләү йәһәтенән бөтөнләй яңы кимәлгә күтәреләсәк.

✔Өфө дәүләт авиация-техник университеты Рәсәйҙең милли ғорурлығы тип аталған 20 юғары уҡыу йорто исемлегенә инде. Ул илдең 2012 йылғы иң яҡшы юғары уҡыу йорттары рейтингыһында 19-сы урын биләй. Һорау алыуҙы РБК медиа-холдингы аналитиктары үткәргән. Алынған мәғлүмәттәр буйынса, беренсе урында - Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университеты, икенсе урында - Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты, өсөнсөлә - Мәскәү физика-техник институты, дүртенсәлә - Мәскәү дәүләт халыҡ-ара бәйләнештәр институты, бишенсе урында - Санкт-Петербург дәүләт университеты.

✔ Башҡортостан Хөкүмәте XIV "Алтын көҙ" Бөтә Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә Гран-при яуланы, сара 11-14 октябрҙә Мәскәүҙә үтте. Был юғары наградаға Башҡортостан Хөкүмәте "Күргәҙмәне үҫтереүгә өлөш индергән өсөн" номинацияһында лайыҡ булды, тип хәбәр иттеләр БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Күргәҙмәлә республиканың яҡынса 140 предприятиеһы һәм ойошмаһы ҡатнашты. Дөйөм алғанда Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы предприятиелары күргәҙмәлә 400-ҙән ашыу миҙал яуланы.

✔Орджоникидзе районының 76-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбендә "Илһам" һүҙ оҫталары конкурсы үтеп китте. Конкурста район мәктәптәре уҡыусылары, уҡытыусылары шиғыр һөйләү оҫталығы буйынса көс һынашты. Бәйгелә 3 номинация ҡаралғайны, "Төньяҡ амурҙары" номинацияһы - 1812 йылғы Ватан һуғышына 200 йыл тулыуға бағышланды. Конкурста барлығы 122 уҡыусы, 5 уҡытыусы ҡатнашты.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Бындай осраҡта бит бер нисә тамсы валокордин ҡабул иткән водителдәр ҙә автоматик рәүештә иҫеректәр рәтенә эләгәсәк, ә был иһә ҙур суммала штрафтар, водитель таныҡлығын алдырыуға алып килеүе ихтимал ине.***



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# "ҠОРО" ЗАКОН...

## тағы ла "ҡорораҡ" булырмы?

**Депутаттар руль артына иҫерек килеш ултырыусыларға бик ҙур штрафтар индерәмәксе. Шул уҡ ваҡытта "0 промилле нормаһы"н да көсөндә ҡалдырырға ҡарар ителде.**

Аҙнаның тәүге көнөн Дәүләт Думаһы депутаттары автомобилселәр көйефен ҡырыуҙан башланы: "Берҙәм Рәсәй"президиумы, иҫерек килеш машина йөрөткән өсөн яуаплылыҡтың ҡәтғиләштерелеүе тураһындағы закон проектын баһалап, эшсе төркөмдәң ҡандағы алкоголдең максималь кимәле булған 0,2 промилле нормаһын кире ҡайтарыу тураһындағы тәҡдимен хупламаны.

Водителдәрҙең ҡанында алкоголде тулыһынса тыйыу Рәсәйҙә 2010 йылдың уртаһында индерелгәйне һәм был, тәбиғи, водителдәрҙә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырғайны, сөнки быҙдай осраҡта бит бер нисә тамсы валокордин ҡабул иткән водителдәр ҙә автоматик рәүештә иҫеректәр рәтенә эләгәсәк, ә был иһә ҙур суммала штрафтар, водитель таныҡлығын алдырыу һәм башҡа ошоноң кеүек күңелһеҙлектәргә алып килеүе ихтимал ине. Бынан тыш, медиктар әйтеүенсә, матдәләр алышыныуы боҙолған осраҡтарҙа ҡайһы бер организмдарҙа картуф, ҡара икмәк ашағандан һуң да хатта ( ә кеүәҫ менән кефир тураһында әйтеп торорға ла түгел) ҡанда әҙ генә күләмдә булһа ла алкоголь барлыҡҡа килә икән.

"Коро закон"ды хупламаусылар шулай уҡ "0 норма"һының ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре өсөн коррупцияға юл асыуы хаҡында ла әйтеп китте. Аҙ ғына миҡдарҙағы алкоголь өсөн ( ә ул 0,2 промилле кистән бөләкәй генә бер көрөшкә һыра эскәндән дә барлыҡҡа килә) кемдеңтөрмәгә ултырғыһы килһен! Ә быҙдай яза - 3 йылға иркенән мәхрүм итеү - яңы закон проекты буйынса бер кемде тапатмаһа ла, ғәриплөмәһә лә, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаһа ла, ләкин ҡанында алкоголдең йөҙөнсө өлөшө промилләһе табылған хәлдә - һәр кемгә янай. Ләкин быҙдай ҡарарҙың бөтәһенә лә оҡшап етмәүе тәбиғи. "Унынсы йә хатта йөҙөнсө өлөш промилле өсөн машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеүҙәрен күреү мәғәнәһеҙлек, ғилемһеҙлек! - тип фекерен белдерә был хаҡта Думаның Конституция законлылығы һәм дәүләт төҙөлөшө буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Вячеслав Лысаков. -Водитель бер тамсы эсмәгән осраҡта ла һәр төрлө факторҙар тәьҫирендә прибор барыбер 0 промилледән күрһәтмәй икән, ни өсөн бөтөнләй гәйепһеҙ кешене язаға тарттырырға һуң?"

Ә шулай ҙа дүшәмбе көн ҡабул ителгән ҡарар әле һуңғы вариант түгел, депутаттар был мәсьәлә буйынса тәүҙә йәмәғәтселек фекерен өйрәнергә булды.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Өфө ҡала округындағы сираттағы матбуғат конференцияһы ниңәлер ошо әйтемде иҫкә төшөрҙө. Ни тиһәң дә, 1 - 29 октябрҙә ҡала Советы ҡарамағындағы Йәштәр ижтимағи палатаһының сираттағы составын формалаштырыу процедураһы ҡайһы яғы менәндер совет заманындағы комсомол тәрбиәһен хәтергә төшөрҙө.**

# ЯҠШЫ ЯҢЫЛЫҠ -

## онотолған иҫкелек ул

Эйе, йәмғиәт бер килке танырға теләмәһә лә, был мәктәп аша үтеүселәрҙең ниндәйҙер өлөшө лидерлыҡ сифаттарына эйә булып, үҙҙәрен вазифалы урында ултырған ағай-апайҙарҙың алмашсыһы, кадрҙар әҙерләү мәктәбенең тәүге баҫҡыстарының береһе һәм сәйәси-гражданлыҡ позицияһы булған шәхес итеп күрһәтә ине. Бөгөн төрлө кимәлдә йәштәр ижтимағи палаталары ойошторолоуын нисәмә йылдар сабыр ғына үҙ ваҡытын көткән ошо бушлыҡты тултырыу зарурлығы килеп тыуыу менән аңлатып булалыр, моғайын. Ни тиһәң дә, изге урын буш тормай.

Матбуғат конференцияһында ҡатнашыусылар, заманға яраҡлаштырып, тап ҡасандыр комсомол сафында булыусылар өсөн төп принциптар булып торған маҡсаттар һәм бурыстарҙы бөгөнгө йәштәрҙе тәрбиәләүҙә ҡулланған алымдар итеп килтерҙе: креатив фекерләгән йәштәрҙе табыу, уларҙы ижтимағи тормошҡа йәлеп итеү, парламент тормошона өйрәтеү, гражданлыҡ позицияһын формалаштырыу. Әлбиттә, совет осоронда был терминдар икенсерәк яңғырай ине. Ләкин бит йөкмәтке, асыл бер үк.

Өфө ҡалаһы округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко билдәләүенсә, Совет ҡарамағындағы Йәштәр ижтимағи палатаһы беренсе тапҡыр 2009 йылда эш башлай. Ошо ваҡыт эсендә ул үҙен эшлекле орган итеп таныта. Ләкин быйыл, депутаттар кеүек үк, уларҙың да вәкәләте тамамланған. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов билдәләүенсә, Палата ағзалары ошо йылдар эсендә 2011-2015 йылдарға иҫәпләнгән "Башҡортостандың баш ҡалаһы йәштәре", "2011-2015 йылдарға "Йәштәр сәйәсәте учреждениелары селтәрен киңәйтеү һәм уларҙың матди-техник базаһын нығытыу" маҡсатлы программаларын әҙерләүҙә ҙур өҙөмтәлек күрһәткән. Тап йәштәр тарафынан төрлө социаль һәм экологик йүнәлешле акциялар уҙғарылған.

Йәштәр ижтимағи палатаһына һайлауҙар өс этапта үтә. Беренсе этапта 16 - 30 йәшлек йәштәр ғаризалар һәм социаль проекттар тапшырырға тейеш була. Бөгөнгә 72 ғариза араһынан барлығы 71 кандидатура һайлап алынған. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: кандидаттар исемлегенә инеү өсөн артыҡ сикләүҙәр ҡуйылмаған, бары тик йәшең тап килһен дә баш ҡалала теркәлеүең булһын. Икенсе этап иһә 19 октябрҙә үтте. Ул һөйләшеү формаһында ойошторолдо. Йәғни кандидаттар үҙҙәренең проекттарын яҡланы һәм комиссияның һорауҙарына яуап бирҙе. "Иләк" аша ни бары 34 кандидат ҡына үтә алды. Финал иһә 24 октябрҙә уҙасаҡ һәм кандидаттарҙы һайлап алыу интеллектуаль уйын формаһында барасаҡ.

Әгәр тәүге Палатала 17 ағза булһа, быйыл был һан икегә арткан. "Быны беҙ баш ҡаладағы һайлау округтары иҫәбенән сығып эшләнек. 18 округ буйынса берәр йәш кеше депутаттарға беркетелһә, берәү Палата рәйесе булырға тейеш. Тағы ла шуныһы: 19 ағзаның 13-ө конкурс нигеҙендә һайланһа, өс кешене - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы, өсәүҙе ҡала Советы Президиумы тәҡдим итәсәк", - тине Евгений Александрович.

Матбуғат конференцияһында ҡатнашыусылар белдереүенсә, Йәштәр ижтимағи палатаһы үҙенә күрә кадрҙар әҙерләү һандалы ла булып тора. Сөнки конкурста ҡатнашырға бары тик әүҙем, фекерле, идеялы йәштәр генә йөрьәт итә.

**Әйткәндәй, 2009 йылда уҡ Волга буйы федераль округының "Йәш сәйәсәт" форумында Өфө ҡала округы Советының Йәштәр ижтимағи палатаһы ағзаларын һайлау принцибы юғары баһаға лайыҡ була һәм башҡа төбәктәргә лә таратырға тәҡдим ителә.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

*... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҺӘЙКӘЛДӘР ТАРИХ ҺАҠЛАЙ



**1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүҙең 200 йыллығына арналған саралар бөтә Рәсәйҙә йыл дауамында уҙғарыла. Башҡортостанда ла был ваҡиға киң билдәләнә һәм яҡтыртыла.**

Сибай ҡалаһында был һуғышта ҡатнашҡан башҡорт полктарына арналған һәйкәл ҡуйыу шундай сараларҙың береһе булды. Ҡаланың төп урамында - Таусылар проспекты башланған ерҙә урынлашҡан гранит һәйкәл йәйә һәм уҡтарын баш өҫтөнә күтәргән яугирҙы һынландыра. Ысынлап та, нәҡ ошондай ҡоралдар менән Наполеон армияһына ҡаршы сыҡҡан башҡорт яугирҙарының даһшәтле көсөн французлар тиҙ таный. Һәйкәл авторы, Мәскәү скульпторы Вадим Кирилловтың башҡорт полктарының төп үҙенсәлеген аңлап эш итеүен танымай булмай. Шулай уҡ һәйкәл урыны ла юҡтан ғына нәҡ ошонда һайланмаған. Тарихи документтар буйынса, әлеге Сибай ҡалаһы урынлашҡан территорияла, Ҡарағайлы һәм Төйәләҫ йылғалары ҡушылған ерҙә, башҡорт полктарын йыйыу, өйрәтеү һәм яуға оҙатыу ойошторолған булған. Шуға күрә "Төньяҡ амурҙары"на һәйкәлдең нәҡ ошонда ҡуйылыуы бик тә урынлы. Әйтергә кәрәк, 7,5 метр бейеклегендәге һәйкәл республикала 1812 йылғы Ватан һуғышында еңеүгә арнап ҡуйылған берҙән-бер монументаль скульптура. Ләкин һуңғыһы түгелдер, тип ышанғы килә, сөнки оло еңеүгә ҙур өлөш индергән башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығы хаҡында иҫтәлекте быуаттар дауамында һаҡлап ҡалыуҙа нәҡ ошондай һәйкәлдәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәйҙә Дәүләт урман реестрын алып барыу менән шөғөлләнәсәк белгестәр әҙерләнә башлаясаҡ. Был хаҡта Өфөлә 18 октябрҙә урман мөнәсәбәттәре өлкәһендә Волга буйы федераль округы субъекттарына тапшырылған вәкәләттәрҙе һөҙөмтәле үтәү мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә Федераль урман хужалығы агентлығы башлығы Виктор Масляков хәбәр итте. Урман реестрын алып барыу буйынса оператор итеп "Рослесинфорг" федераль дәүләт унитар предприятиеһы һайланды.

✓Быйыл Халыҡтар берҙәмлеге көнө - 4 ноябрь йәкшәмбегә тура килә. Шуға күрә ял көнө 4 ноябрҙән 5 ноябргә күсерелә. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында Рәсәйҙә 3, 4 һәм 5 ноябрь ял көндәре булып тора. Шулай уҡ иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәйҙә 2013 йылда ял көндәрен күсереү графиғы раҫланды. Уға ярашлы, Яңы йыл каникулдары рәсмиләштереү өсөн 10 көн - 2012 йылдың 30 декабренән 2013 йылдың 8 ғинуарына тиклем дауам итәсәк. 2013 йылдың майында Яҙ һәм хеҙмәт байрамын билдәләү айканлы - биш көнлөк ял, Еңеү көнөнә ҡарата дүрт көнлөк ял ҡаралған.

✓Төрки телле шиғриәт әҫәрҙәрен тәржемә итеүселәрҙең II "Аҡ торна" Халыҡ-ара конкурсы уникаль мәҙәни сараға, төрки телле шиғриәт әҫәрҙәрен тәржемә итеүселәрҙең илдәге берҙән-бер масштаблы конкурсына әүерелде. Унда Рәсәйҙең күп төбәктәренән, шулай уҡ яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән авторҙар ҡатнаша. "Аҡ торна"ның шорт-лисына 35 ҡатнашыусы индерелде. Улар башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, төрөк һәм башҡа төрки телдәрҙән шиғырҙар тәржемә иткән Енеүселәргә тәбрикләү тантанаһы Өфөлә ноябрҙә үтә. "Башҡорт теленән иң яҡшы тәржемә өсөн" махсус приз да ҡаралған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, ошо аҙнаның ял көндәрендә юлда капиталь ремонт эштәре үткәреү менән бәйле СССР-ҙың 50 йыллығы урамының Октябрь проспектынан "Өфө приборҙар төҙөү производство берекмәһе" административ бинаһына тиклемгә өлөшө ябыла.

✓28 октябрҙән "Өфө" Халыҡ-ара аэропорты ҡышҡы расписание буйынса эшләүгә күсә, ул 2013 йылдың 30 мартына тиклем дауам итәсәк. Мәҫәлән, ҡышҡы расписаниела "Шарджа - Өфө - Шарджа" рейсын үтәүсе "Эйр Арабиа" яңы авиакомпанияһы барлыҡҡа килде. Шулай уҡ ҡайһы бер яңы рейстар планлаштырыла, һорау менән файҙаланған рейстарҙың осош йышлығы арттырыла.

*БЫЛ БЕҘҘЕ БОРСОЙ*

# БЕҘ, БЕҘ, БЕҘ ИНЕК,

## тиҫтә йылда… юҡ булдыҡмы?




**2010 йылда үткән Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһының ҡайһы бер мәғлүмәттәре былтыр республика матбуғаты биттәрендә баҫылып сыҡҡайны инде. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, тулыһынса түгел. Ул мәғлүмәттәрҙә Башҡортостан райондарында күпме халыҡ йәшәгәнлеге күрһәтелгән, ә бына төрлө милләт вәкилдәре күпме - ул турала ләм-мим.**

Шулай итеп, һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Рәсәй Федерацияһында 1 млн 584 мең 554 башҡорт иҫәпләнә. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса был һан 1 млн 673 мең 389 ине. Йәғни 1926 йылдағы кәмеүҙән һуң артабанғы барлыҡ халыҡ иҫәбен алыуҙарҙа ла башҡорттарҙың һаны артып килеп, беренсе тапҡыр милләт һаны 88 мең 85 кешегә кәмегән. Республикала башҡорттар һаны ғәмәлдә 49 мең самаһы кешегә кәмегән, йәғни күрһәткестәрҙең яртыһы тиерлек тыуған Башҡортостанға тура килә.

Күрше өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттар буйынса ла, үкенескә күрә, һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре тулы түгел. Башҡортостан Республикаһынан ситтә башҡорттар 412 мең 267 кеше, йәғни барлыҡ башҡорт халҡының 26 проценты, иҫәпләнә. Үкенескә күрә, РФ субъекттарында ла, Мәскәү ҡалаһын иҫәпкә алмағанда, бөтөн урында ла башҡорттарҙың һаны кәмеүе күҙәтелә. Мәҫәлән, Силәбе өлкәһендә 2002 йылда 166372 башҡорт йәшәһә, 2010 йылға халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса был һан 162513 кеше тәшкил итә.

**Ырымбурҙа** 2002 йылда 52685 башҡорт булһа, 2010 йылда 46696 кеше.

**Төмән өлкәһе:** 2002 йыл - 46525, 2010 - 46405.

**Пермь крайы:** 2002 - 40740, 2010 - 32730.

**Татарстан Республикаһы:** 2002 - 15 мең самаһы, 2010 - 13726 .

**Ҡурған өлкәһе:** 2002 - 15500, 2010 - 12257.

**Һамар өлкәһе:** 2002 - 7885, 2010 - 7290,

**Мәскәү ҡалаһы:** 2002 - 5941, 2010 - 6609. Башҡорттарҙың һаны артҡан берҙән-бер урын.

**Удмурт Республикаһы:** 2002 - 4320, 2010 - 1454.

Артабан Һарытау, Мәскәү өлкәләре, Коми Республикаһы, Тамбов, Краснодар крайҙары һ.б. тора. Улар буйынса 2002 йыл мәғлүмәттәре бар, 2010 йыл мәғлүмәттәре юҡ. Әлбиттә, ундағы башҡорттар юҡҡа сыҡмаған, уларҙың һаны бары тик 2000 кимәленән түбән төшкән. Әгәр халыҡ һаны ошо кимәлдән түбән төшә икән, уларҙы "башҡалар" тигән графаға индерәләр. Шулай итеп, ҡайһы бер төбәктәрҙә башҡорттар тап ошо графаға эләккән дә инде.

Башҡорттарҙың билдәле бер өлөшө союздаш республикаларҙа йәшәне. 1989 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, уларҙа 103884 башҡорт йәшәгән. Әлбиттә, күпселек Ҡаҙағстанда булған - 42 мең самаһы. Үзбәкстанда - 34 мең, Украинала - 7,5 мең, Тажикстанда 7 мең самаһы. Ә бына 21-се быуат башында Ҡағаҙстанда 23 мең, Украинала - 4253, Ҡырғыҙстанда - 2044, Тажикстанда - 872, Беларуста - 1091. Был мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алғанда, ошо дәүләттәрҙә яҡынса 50 мең самаһы башҡорт йәшәй. Ләкин һуңғы халыҡ иҫәбен алыуға улар инмәй ҡалған.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры Марат ҠОЛШӘРИПОВ был хәлгә ҡарата ошондай баһа бирҙе: "Башҡорттар һанының былай катастрофик рәүештә кәмеүенә бер ниндәй сәбәп тә булманы. Ә уйлап ҡараһаң, үҙ республикабыҙҙа ҙур халыҡтар араһында беҙ кәмеү буйынса беренсе урында торабыҙ, шул уҡ ваҡытта татарҙарҙың һаны Рәсәй масштабында кәмеһә лә, республикала артҡан. Шуның өсөн мотлаҡ ҙур конференция йыйырға, уға социологтарҙы йәлеп итергә, башҡорттарҙың ни өсөн кәмеүенең сәбәптәрен асыҡларға кәрәк. Сөнки, мәғлүм булыуынса, ауыл ерендә йәшәүсе башҡорттар, ғәҙәттә, күп балалы, һәм ауылдарҙа башҡорттар һаны артҡан. Күп балалы әсәләрҙе тәбрикләү исмелеге лә быны раҫлай. Һәм ҡапыл шундай кәмеү. Был, халыҡ иҫәбен алғанда башҡорттарҙың һанын яһалма рәүештә кәметкәндәр, тигән һығымтаға этәрә. Был осраҡта мине РФ субъекттарындағы һәм республикалағы башҡорттарҙың демографик хәле лә борсой. Демократияның барлыҡ ҡағиҙәләре буйынса мин был мәғлүмәттәргә ышанмайым. Ни тиһәң дә, һуғыш булманы, аслыҡ кисермәнек, эпидемиялар үтмәне. Хәҙер беҙҙе БМО-ның, ЮНЕСКО-ның бөтөп барған халыҡтары исемлегенә теркәп ҡуйҙылар. Шуға күрә, был проблеманы етди тип һанайым. Һәм уны дәүләт кимәлендә күтәреп сығырға, фәнни нигеҙҙә уның сәбәптәрен асыҡларға кәрәк.**

**Сәбәптәрҙең береһе өҫтә генә ята - мәктәптәр проблемаһы. Мәҫәлән, Ырымбурҙа Беренсе һәм Икенсе Иманғол ауылдары бар. Уның береһе - башҡорт, икенсеһе татар ауылы. Башҡорт Иманғолонан Бәхтегәрәй Шәфиев, Әхмәт Иҫәнсурин кеүек билдәле дәүләт эшмәкәрҙәре сыҡҡан. Әммә уҙған быуаттың 90-сы йылдарында башҡорт ауылында уҡытыу татар телендә алып барыла ине. Халыҡ татар телендә һөйләшә башлағайны. Бер нисә йылдан был башҡорт ауылы тулыһынса үҙен татар тип йөрөтәсәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# МИЛЕКСЕ ИХТЫЯРЫНДА

**Ҡатыным беҙ өйләнешкәнгә тиклем үк алған фатирын һатырға йыйына. Милекселек хоҡуғы уның исемендә, никах килешеүебеҙ юҡ. Фатирҙы һатҡан аҡсаның бер өлөшөнә дәғүә итә аламмы?**

- Ҡатынығыҙҙың һеҙ өйләнешкәнгә тиклем үк алынған һәм шәхси милке иҫәпләнгән фатирын һатыуҙан килгән аҡсаға дәғүә итә алмайһығыҙ. Был йәһәттән һеҙгә ир менән ҡатындың уртаҡ милке тураһында ҡыҫҡаса белешмә биреп китеү кәрәктер, тип таптыҡ. РФ Ғаилә кодексының 34-се статьяһына ярашлы, ир менән ҡатындың никах осоронда тупланған милке генә уртаҡ булып иҫәпләнә. Уға ир менән ҡатындың һәр береһенең хеҙмәт, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенән йәки интеллектуаль эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә алынған килеме, махсус маҡсатлы тәғәйенләнеше булмаған (матди ярҙам, имгәнеү йә һаулығына башҡа төрлө зыян килеүҙән хеҙмәткә һәләтен юғалтыу менән бәйле зыянды ҡаплау өсөн түләнгән сумма иҫәпләнмәй) аҡсалата түләүҙәр инә. Бынан тыш, дөйөм килем иҫәбенә алынған күсемле һәм күсемһеҙ әйберҙәр, ҡиммәтле ҡағыҙҙар, пайҙар, һаҡлыҡ кассаһындағы аҡса, кредит учреждениелары һәм башҡа коммерция ойошмаларҙың капиталындағы өлөш (аҡса кем өлөшөнә һәм кем тарафынан индерелеүенә ҡарамаҫтан) шулай уҡ уртаҡ милек иҫәпләнә. Ләкин был ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе бар: Ғаилә кодексының 36-сы статьяһы 1-се бүлегенә ярашлы, ир йә ҡатындың береһе тарафынан никах осоронда бүләккә, мираҫ итеп йә булмаһа башҡа төрлө түләүһеҙ килешеү буйынса алған милке шәхси милек иҫәпләнә һәм уның менән милексе үҙ ихтыярында эш итә.

# ӨЛӨШЛӘТӘ ФАЙҘАЛАНЫУ

**Сабыйыма йәш ярым. Бала ҡарау буйынса отпускымды өҙөп, биш ай эшләгәс, мин тағы ла балаға өс йәш тулғансы отпускымды дауам итә аламмы?**

- РФ Хеҙмәт кодексының 256-сы статьяһына ярашлы, бала ҡарау буйынса отпуск әсәгә уның ғаризаһы буйынса балаһына өс йәш тулғанға тиклем бирелә. Был отпуск баланы ҡараусының кем булыуына ҡарамаҫтан (әсәнең үҙе, баланың атаһы, өләсәһе, ҡартатаһы, башҡа туғаны йә опекуны) тулыһынса йәки өлөшләтә файҙаланылырға мөмкин. Күреүебеҙсә, закон отпускыға хоҡуҡты ваҡыттың ниндәйҙер аныҡ мәле менән бәйләп ҡарамай, шуға күрә әсә кеше балаһына өс йәш тулғансы ошо отпускыһының теләһә ҡайһы өлөшөн файҙалана ала һәм был турала ғаризаһында күрһәтеп, эш биреүсегә мөрәжәғәт итә. Ә эш биреүсе үҙ сиратында уның ғаризаһын ыңғай хәл итергә бурыслы.

# ҺАЛЫМ ТҮЛӘТЕЛМӘЙ

**Ниндәй төр килемдән һалым түләтелмәй?**

- Федераль һалым хеҙмәте тарафынан һалым түләүселәр өсөн төҙөлгән иҫкәрмәлә декларация биреү һәм һалым түләү ҡаралмаған түбәндәге осраҡтар күрһәтелә:

● йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеларҙан, алименттарҙан, дәүләт пенсияларынан, стипендияларҙан, торлаҡ һатып алыу йәки йорт төҙөү өсөн алынған займ һәм кредиттар буйынса процентарҙы ҡаплау өсөн эшсәндәргә тәғәйенләнгән түләүҙәрҙән һ.б.

● милексе ҡарамағында 3 йыл һәм унан да күберәк ваҡыт булған (фатир йәки машина) милекте (ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙан башҡа) һатыуҙан алынған килемдән;

● мираҫ тәртибендә алынған килемдән;

● ойошмаларҙан - бүләк итеү тәртибендә алынған һәм физик шәхестәр тарафынан бүләк ителгән әйберҙәр хаҡының суммаһы 4 меңдән артмаһа. Күсемһеҙ милек, транспорт сараһы, акциялар (һуңғыһын яҡын туғандары бүләк итһә, һалым һалынмай) кеүек бүләктәр был пунктҡа инмәй.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Эпилепсия (Халыҡ ысулдары менән дауалау)

Дауаның файҙаһы булһын өсөн ауырыуға тоҙ һәм шыйыҡлыҡтарҙы ҡулланыуҙы сикләргә, алкоголде бөтөнләй эсмәҫкә, ҡояшта йылыныуҙан һаҡланырға, кадрҙарҙың тиҙ алышыныуы һөҙөмтәһендә сыбарланып торған экран, транспорт тәҙрәһенән пейзаждың тиҙ ағылып үтеүе, джаз музыкаһы кеүек күреү һәм ишетеүҙе ярһытыусы нәмәләрҙән йырағыраҡ торорға кәрәк.

Фаягөл йәки тумыртҡа мышары (Синюха голубая) тип йөрөтөлгән үлән эпилепсия, нервылар ҡаҡшағанда, йоҡоһоҙлоҡта, көсөргәнеш һәм стресс хәлендә яҡшы файҙа бирә. Төнәтмә былай әҙерләнә: фаягөл үләненең тамырын 10 грамм, үләнен 20 грамм алырға һәм 70 процентлы 200 мл спиртта ике аҙна буйы ҡараңғы урында төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 15-әр тамсылап эсергә.

Күберәк сей һуған ашарға, уның һутын эсергә. Һуған ашаһаң, өйәнәк һирәгерәк ҡабатлана, ул шулай уҡ көсһөҙләнә лә.

Бесәй үләне (валериана лекарственная). Бер ҡалаҡ бесәй үләне тамырына 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға, 6-8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмә әҙерләүҙең тағы бер ысулы: 1 ҡалаҡ тамырҙы термосҡа һалырға, 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә. Икенсе көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Артыҡ ярһыулыҡ ваҡытында төнәтмәне стакандың өстән бер өлөшө күләмендә 3 тапҡырҙа уҡ эсеп бөтөрөргә. Бесәй үләненең дауалау тәьҫире төрлө кешегә төрлөсә. Шулай ҙа был үләнде 1,5-2 айҙан артыҡ эсергә ярамай, сөнки баш ауыртыуы, хәүеф тойғоһо барлыҡҡа киләсәк.

### Ангина

❖ Муйынға кәбеҫтә япрағын һалып, өҫтөнән йылы шарф йәки яулыҡ бәйләп ҡуйырға. Ике сәғәт һайын япраҡтарҙы алыштырырға. Шешеү процесы туҡтағанға тиклем дауам итергә.

❖ Сөгөлдөрҙө ҡырғыстан үткәреп, 1 ҡалаҡ һеркә өҫтәргә. Сөгөлдөрҙән һут һығып алғас, шуның менән тамаҡты сайҡатырға. 1-2 ҡалаҡ һутты эсергә.

❖ Ҡырғыстан һуғанды үткәреп, һутын һығып алырға. Иртән һәм кисен 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Һутын һығып алғандан һуң ҡалған һуған бутҡаһы менән компресс яһарға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

***✓ Хəҙер был боронғо һөнəр менəн булышыусы кеше юҡ иҫəбендə, шуға бүтəндəргə лə эйəр эшлəү серҙəрен өйрəтəм. Əле бер эйəремде музейға алып киттелəр. Йəнə солоҡҡа лəңге, бығау, кирəмдəр эшлəйем.***



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА

# ДИН ҺƏМ МƏҘƏНИƏТ



### Алтынсы дəрес: "Ислам мəҙəниəте нигеҙҙəре"

Билдəле булыуынса, һүҙҙəрҙең мəғəнəһен белгəндə генə, фекер иҫтə ҡала. Шуның өсөн уҡыусылар дəфтəргə теманың исемен яҙып ҡуйғас та йəйəлəр эсенə тəржемəһен яҙып ҡуйһын. Һижрəт - ғəрəп һүҙе, сит ергə күсеп китеү, тигəнде аңлата. Мөхəммəт бəйғəмбəрҙең һəм башҡа мосолмандарҙың Мəккəнəн Йəсрибкə /аҙаҡ Мəҙинə/ күсенеүе һижрəт тип атала. Был хəл 622 йылда була. Ошо йылдан башлап мосолманлыҡ нығына һəм киң тарала башлай. Тимəк, йыл иҫəбе 622 йылдың 16 июленəн иҫəплəнə. Тəүге ай Мөхəррəм айы тип атала.

Һижри йыл иҫəбе Милəди йыл иҫəбенə тап килмəй. Милəди - тыуыу тигəн һүҙ. Милəди йыл - хəҙерге календарь йылы - Ғайса бəйғəмбəр тыуған йылдан башлана. Һижри йыл менəн Милəди йылдарҙың айырмаһын ябай арифметик юл менəн, йəғни 622 һанын алып ташлап ҡына иҫəплəп сығарып булмай, сөнки хəҙерге календарь йылының ай көндəре Мосолман календарының ай көндəренə тап килмəй. Мосолман йылы 354 (кəбисə йылы 355) көндəн торһа, милəди йыл 365 (кəбисə йылы 366) көндəн тора. Шуның өсөн йылдар иҫəбен иң яҡшыһы дини календарҙан ҡарап белергə кəрəк. Ай көндəренең һаны тап килмəгəнлектəн, мосолман байрамдарының көндəре, ураҙа айҙары ла төрлө ваҡытҡа тура килə. Мөхəррəм айы - 30 көн, Сəфəр айы - 29, Рəбиғүл əүүəл айы - 30, Рəбиғүл ахыр айы - 29, Йомадиəл əүүəл - 30, Йомадиəл ахыр - 30, Рəжəб - 30, Шəғбан - 29, Рамаҙан - 30, Шəүүəл -29, Зөлҡəғиҙə - 29, Зөлхизə - 30 көн. Был иҫəптəр артабан да кəрəк буласаҡ, шуның өсөн уҡыусыларға аңлатып, дəфтəрҙəренə яҙҙырып ҡуйыу яҡшы булыр.

### Бишенсе дəрес: "Донъя диндəренең мəҙəниəт нигеҙҙəре"

Изге китаптар. Боронғо халыҡтар, яҙма булмаған ваҡытта уҡ, ижад итеү менəн шөғөллəнгəн. Үҙҙəренең фекерҙəрен шиғри юлдарға һалған, сөнки сəсмə əҫəрҙе үҙгəртеп, өҫтəп тə, ҡайһы бер өлөштəрен төшөрөп ҡалдырып та була. Ə шиғри ҡалыпҡа һалынғаны, бер яҡтан, телгə лə, зиһенгə лə йоғошло булһа һəм хəтерҙə тиҙ ҡалһа, икенсе яҡтан, үҙгəртеп булмай. Мəҫəлəн "Урал батыр" эпосы, ҡобайырҙар, йырҙар, "Үҫəргəн шəжəрəһе" һəм башҡалар. Улар фəҡəт ауыҙ-тел ижады рəүешендə генə, телдəн-телгə күсə килеп һаҡланған. Тора-бара изге яҙмаларҙы был рəүешле генə һаҡлап ҡалдырып булмаҫын аңлай башлағандар һəм яҙып ҡалдырыу мохтажлығы башланған. Шулай уҡ йəһүд дине аллалары тураһында риүəйəттəр ҙə бер илдəн икенсе илгə таралып, Һиндостанға барып етеп, унда тəүге текстар яҙыла. Буддизм яҙмышы ла шулай уҡ - тəүҙə телдəн тарала, аҙаҡ Будданың уҡыусылары пальма япраҡтарына яҙа башлай. Рəсəй Библия йəмғиəте Библияның башҡорт теленə тəржемəһен нəшер итте. Ул тиҙҙəн донъя күрəсəк. Əгəр ҡулығыҙға был китаптар элəгə икəн, алып танышырға, уҡырға мөмкин.

### Бишенсе дəрес: "Донъяуи этика нигеҙҙəре"

Яҡшылыҡ менəн яуызлыҡ төшөнсəһе кешелек донъяһы менəн бергə бар булған һəм улар йəнəш йəшəй, тигəн фекер əйтелə "Урал батыр" эпосында. Эпоста яҡшылыҡты кəүҙəлəндергəн Урал батыр яуызлыҡ ҡылыусы ағаһы Шүлгəнде үлтермəй. Тимəк, яҡшылыҡ менəн йəнəш яуызлыҡ та йəшəүен дауам итə.

Һəр халыҡ килəсəк быуындың үҙенəн камилыраҡ, аҡыллыраҡ, белемлерəк, зиһенлерəк, яҡшыраҡ булыуын телəй һəм ошо маҡсатын тормошҡа ашырыу йүнəлешендə тəрбиəлəй. Тəрбиə ҡанундары айырым ҡағиҙə итеп теҙеп яҙылмаһа ла ижады аша бирелə. Башҡорт халҡында "Урал батыр" эпосын тəрбиə ҡанундары тупланмаһы тип атау һис кенə лə яңылыш булмаҫ. Шуның өсөн яҡшылыҡ менəн яуызлыҡ тураһында һөйлəгəндə ошо эпостан өҙөктəр алырға, өйгə эш итеп мəҡəлдəр яҙып килеүҙе ҡушырға кəрəк. Яҡшылыҡ (изгелек) һəм яуызлыҡ (яманлыҡ) төшөнсəлəре кешелек донъяһы бар булғандан алып бөгөнгəсə йəшəй һəм мəңге буласаҡ. Ҡайһы төшөнсəгə өҫтөнлөк биреүҙе кеше үҙе һайлай. Тормошта был ике төшөнсə араһында береһен һайлай торған осраҡтар бик күп була. Əммə үҙ намыҫы алдында яуаплылыҡ тойған кеше бер ваҡытта ла яманлыҡ юлын һайламай. Яҡшылыҡ юлын һайлаусылар күпселек. Улай булмағанда, кешелек донъяһы алға бара алмаҫ, үҫеш булмаҫ ине.

**Мəрйəм БУРАҠАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

ЕТМЕШ ҺӨНƏРЛЕ ИР-ЕГЕТ

**Бирһə бирə шул Хоҙай бəғзе бер кешеһенə: нимəгə тотонһа, шунда ут уйната. Талант Хоҙайҙан булһа ла, уңғанлыҡ үҙеңдең ҡулыңда һəм ихтыяр көсөңдə. Хоҙай биргəн һəлəтеңде эшкə егəһеңме, əллə уны үҙ ҡаҙанышыңдай күреп, күкрəк киреп ғүмер итəһеңме - йəнə үҙеңдəн. Һəр хəлдə, һəр икеһенə лə миҫалдар тулып ята.**

# ИР-ЕГЕТТЕҢ КӨСӨ...

## белəгендə лə, йөрəгендə лə



Мəҡсүт ауылында йəшəүсе Мөхəррəм Нəҙершин да Хоҙайҙың һөймəлеклеһелер, моғайын. Юғиһə, бер кешелə шул хəтлем һəлəт булыр инеме: ағастан һындарҙы ҡойоп ҡына ҡуйыуы етмəй, үҙе шағир, йырсы, һəүəҫкəр композитор, гармунсы, умартасы, солоҡсо, һунарсы, балыҡсы... Юҡ, һанап бөтөрлөк түгел. Бына тигəн ғаилə башлығы, терəк булырлыҡ ир, таяныс булырлыҡ атай икəнен дə өҫтəйек. Уның күңел һəм ижад емештəре ҡайҙа ғына юҡ бөгөн - музейҙарҙы, йорттарҙы биҙəй. Ə үҙенең йорто һуң əле! Сынъяһау, тиҙəр ундай өйҙəр хаҡында. Йорт хужаһының ысын тəбиғəт балаһы икəнен раҫлап, ҡапҡанан башлап төрлө ҡош, йəнлек һындары ҡаршы ала, солан башынан ояһы янындағы ҡауҙы сəлəмлəй.

Мөхəррəм ағайҙан оҫталыҡ эшенə тотоноп китеү тарихын һорашам.

- Тəүге ижад емешем - башҡорт ҡыҙы һыны Алыҫ Көнсығышта ҡалды инде. Кедр ағасында ҡатын-ҡыҙ һынына оҡшаған һүрəт тойомлап алдым да юна башланым. Шулай сəсен үреп торған башҡорт ҡыҙын мəңгелəштереп киттем, - тип көлə əңгəмəсем.

Армиянан ҡайтҡас, был шөғөлгə ихласлап тотона. Ниндəй генə һындар юнмай ул - торна, айыу, һуйыр, бөркөт... "Башҡортостан" милли паркы заказ биреп тə эшлəтə. Əйткəндəй, Мөхəррəм ағай шул паркта солоҡсо вазифаһында.

- Бөгөнгə көнгə тиклем 72 солоҡ юндым, иҫəбем - йөҙгə тултырыу. Өйлəнгəс, көтөү көтөргə тура килгəйне. Шунда, ваҡыт үтмəгəс, балаларға уйынсыҡтар юнып алып ҡайта торғайным. Аҙаҡ ауыл клубында ла эшлəп алдым. Шунан паркка эшкə саҡырҙылар. Шөкөр, күргəҙмəлəрҙə беренсе урындан ҡалған юҡ. В. Путин Өфөгə килгəндə эйəр эшлəп алып барҙым. Хəҙер был боронғо һөнəр менəн булышыусы кеше юҡ иҫəбендə, шуға бүтəндəргə лə эйəр эшлəү серҙəрен өйрəтəм. Əле бер эйəремде музейға алып киттелəр. Йəнə солоҡҡа лəңге, бығау, кирəмдəр эшлəйем. Ҡараға буяп ҡуйһаң, тимер һымаҡ була, музейға эшлəһəм, шулайтам. Заказдар бик күп. Ҡайһы саҡ өлгөрөп булмай китə. Улдарым Азамат менəн Алмаз да һүрəткə шəптəр. Алмаздың үҙенең солоҡтары бар.

Һындарҙы күҙ алдына килтереп эшлəйем, ə алдыма һүрəт ҡуйып түгел. Ағас үҙе өйрəтə ул нисек эшлəргə, күңелгə бирə. Күбеһенсə һөйəн ҡулланам. Һындарҙы ялғауһыҙ, бер бөтөн ағастан юнам. Батмандар ҙа яһайым. Ҡырҙан бер умартасы 15 батман яһатып алды. Баҡһаң, йəрминкəлə бының банкалағы балы үтмəй икəн, ə батман менəн тəҡдим итһəң, тиҙ үк һатылып бөтə, ти. Шулай эше бермəбер ыраған бының. Аҙаҡ рəхмəт əйтеп китте, тағы алам, тине.

Оҫталыҡ ҡоралдарын, станоктарҙы үҙем эшлəп алам, хəҙергелəр бигүк уңайлы түгел. Боронғо металдар һəйбəт. Умарталарым, нигеҙҙə, урманда. Күбеһе солоҡ умарта. Уларҙы ҡарап йөрөп арып кителə. Кирəм менəн менгəндə ҡулдарға күперткелəр сығып бөтə хатта, - тип үҙенең шөғөл-һөнəре хаҡында ихлас һөйлəп алды оҫта.

Яйлап ҡына хəбəр айышын уның йырсылыҡ оҫталығы яғына йүнəлтəм.

- Зариф тигəн бабайым булған. Ул һуғышта ятып ҡалған. Үҙе мандолина, думбыралар яһап уйнап ултырыр булған. Уның был донъя менəн хушлашыуы ла моң аша булған. "Алышҡа мылтыҡ тотоп түгел, ҡурай уйнай-уйнай инеп

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...



# ӨФӨ ТУРАҺЫНДА...

## Рычковтың хəҡиҡəти һүҙе

**Ошо көндəрҙə тыуыуына 300 йыл тулған Рычков Петр Иванович (1712 - 1777) - иҡтисадсы, тарихсы, географ, натуралист, Санкт-Петербург Фəндəр академияһының беренсе мөхбир-ағзаһы, коллегия советнигы. Алтмышҡа яҡын ғилми хеҙмəт, шул иҫəптəн "Ырымбур губернаһы топографияһы", Башҡортостан тарихы буйынса мөһим ғилми эштəр авторы. Төбəктең файҙалы ҡаҙылма байлыҡтарын, хайуандар һəм үҫемлектəр донъяһын, башҡорттарҙың хужалығы һəм көнкүрешен тасуирлап яҙған. Башҡортостандың Рус дəүлəтенə ҡушылыуы, төбəкте колониялаштырыу, XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт яуҙары тарихын, башҡорттарҙың этногенезы мəсьəлəлəрен өйрəнгəн.**

П. И. Рычков Башҡортостанға 1734 йылда Ырымбур экспедицияһы составында бухгалтер булараҡ ҡына килə. Һуңғараҡ ул Ырымбур губернаһының ҙур чиновниктарының береһе булып китə. Эшенəн буш ваҡытта Рычков киң ғилми тикшеренеүҙəр алып бара: уның күп һанлы мəҡəлəлəре Рəсəйҙең төп фəнни журналдарында донъя күрə.

Өфө ҡалаһы тураһында П.И. Рычков үҙенең "Ырымбур тарихы" ("История Оренбургская", 1759) һəм "Ырымбур губернаһы топографияһы" ("Топография Оренбургской губернии", 1762) тигəн иң билдəле хеҙмəттəрендə яҙып китə. Əгəр автор "Ырымбур тарихы"нда Өфө тураһында ҡыҫҡаса ғына мəғлүмəт килтерһə, икенсе баҫмала инде "О городе Уфе и о всей Уфимской провинции" тигəн бүлек бағышлай.

Ул бүлектə Рычков былай тип яҙа: "Ышаныслы сығанаҡтарҙан күренеүенсə, башҡорттар яһаҡты алыҫ йөрөтмəҫ өсөн һəм яу килгəндə һаҡланыу урыны булдырыу маҡсатында үҙ ерҙəрендə ҡала һалдырыу ниəте менəн 1753 йылда батша Иван Васильевичҡа мөрəжəғəт иткəн. Ҡала бейек тауҙарға уралған Ағиҙелдең уң яҡ ярында, тəрəн һигеҙ йырын араһында һалынған. Шул йырындарҙың береһенəн Саталҡы йылғаһы ағып ята. Өфөнөң исемен бындағы боронғо ҡаланан алғандар, тип əйтергə була. Ни өсөн тигəндə, нуғай хандары йəшəгəн осорҙа уҡ бындағы ҡала Өфө тип аталыр булған. Икенсе яҡтан, Ағиҙел ярында төҙөлгəн ҡалаға Өфө (Ҡариҙел) йылғаһының исемен алып ҡушҡандар, тиеү мəғəнəһеҙ. Өфө йылғаһы Ағиҙелгə ҡаланан саҡырым өҫтəрəк ҡоя. Йылға

***✓ Айыу ҙа минән ҡалышмай. Шулай ул ағасҡа уралып бөттө. Миңә шул кәрәк тә инде. Һөжүмде башларға йыйынам. Йыртҡыс миңә ҡарай ырғый ҙа, тросы тартылып, ултыра төшә. Уның һайын нығыраҡ ярһый.***



китте. Шунан яйлап барып ҡурай тауышы өҙөлдө", тигән сәләм еткергәндәр туғандарына уның хаҡында. Эйәрҙәр ҙә яһаған. Шул бабайымдан күскәндер миңә моң. Тәүге йырым "Һауаларҙа оса ҡарлуғас" тигән йыр булды. Ауыл, тыуған яҡ темаһы яҡын миңә. Хәҙер йырҙарымды йәштәр йырлап йөрөй. Ҡырҙан килеп яҙҙырып та алып киттеләр, - ти моң эйәһе.

Мөхәррәм ағайҙың һунарсы икәнен дә белгәс, берәй һунар тарихы хаҡында һорашырға ла тел ҡысытып ҡына торҙо. Яйлап, хәбәрҙе лә шул тарафҡа юҫыҡландырҙым.

- Бер мәлде күрше Ҡотан ауылына цирк килде. 5 йәшлек улым Азамат, шунда алып бар, тип мыжый. Йыландар, маймыл бар, тип ишеткән дә ҡыҙыҡҡан был. Ә мин, улым, әйҙә минең менән, һиңә ысын цирк күрһәтәм, тием. Шунан алда ғына ауыл халҡының бик күп малын аяуһыҙ ҡырған айыуға тоҙаҡ ҡорғайным. Шуны барып ҡарарға йыйына инем. Сөнки төшөмдә айыу эләккән тип күргәйнем. Етеп барғанда мөңгөрләгән тауыш ишетелә башланы. Мылтыҡ алмағанмын, етмәһә. Билдә бысаҡ, ҡулда балта. Бөтә ҡорал шулар. Нимә күрәм: тоҙаҡҡа елле генә айыу эләккән бит. Ағасҡа тотонған да беҙгә ҡарап тора был. Тоҙаҡ муйыны аша ҡултыҡ аҫтынан үткән. Айыуҙы үлтерергә кәрәк бит инде. Улым, тием, миңә бер нәмә булһа, ошо әле килгән юлдан ғына ҡайтырһың, йәме. Уңарса айыу үрһәләнә башланы. Ағас ослап, һөңгө эшләп алдым. Балта тауышына уғата ҡоторона теге. Унан яйлап айыу эргәһендәге ағасты уратып йөрөй башланым. Айыу ҙа минән ҡалышмай. Шулай ул ағасҡа уралып бөттө. Миңә шул кәрәк тә инде. Һөжүмде башларға йыйынам. Йыртҡыс миңә ҡарай ырғый ҙа, тросы тартылып, ултыра төшә. Уның һайын нығыраҡ ярһый. Бер һикергәнендә һөңгө менән сәнсеп өлгөрҙөм. Унан балта төйҙәһе менән башына һуҡтым. Иҫерек һымағыраҡ бәүелеп, ҡолап китте. Бысағымды һурып алып, айыуға аша атланып, тегене салып торһам, арттан иплән кенә берәү яурынға төрттө. Тән әҫеле-һыуыҡлы булып китте - балаһы булдымы икән әллә? Иплән кенә боролоп ҡараһам, улым эргәгә килгән икән. Атай, был мин, тигән була. Атай, айыу һинең менән ҡалай ныҡ һуғыша ул, тип тә өҫтәне. Ҡайтҡас, һунар серҙәренең бөтә әтнәкәһен яҡшы белгән атайым был дыуамаллығым өсөн ныҡ ҡына әрләне.

Йәнә бер тарих. Нөгөш буйында Әнүәр тигән иптәшем менән көтөү көтөп йөрөйбөҙ. Көн һайын тигәндәй малды айыу йыға ла ҡуя. Кискеһен аңдып та ҡарайбыҙ. Юҡ, тап итеп булмай. Йәшәгән хәйләкәр айыу инде - алып булмай. Эшкинмәгән генә ҡушкөбәгем бар ине. Сәфәр ағайым биргәйне. Бөтә ҡорал шул. Бер китеп барһам, этем өрә башланы. Алда - ҡәлғә һымаҡ итеп һалынған таш өйөмө. Аҡбайым шул ташҡа баҫып өрә. Көҙ ине. Аяҡ аҫтында япраҡтар шыптырлығын сыға. Ахыры, итекте сисеп бәрҙем. Күҙгә эләкте - айыу донъяһын онотоп, мал емтеген ашап ята. Эт миңә ҡарап тора. Беҙҙе аңғарып ҡалғас, айыу штангистар һымаҡ итеп аяҡҡа баҫты. Елле кәүҙәле. Мылтыҡты тоҫҡап атып ҡарайым - осечка артынан осечка. Айыу ҙа тик тормай бит, тәбиғи инстинкты буйынса һөжүмгә ташланырға әҙер - бөтөнләй яҡынланы. Ике-өс метр ғына самаһы ерҙә был. Танауы мырш-мырш килә. Бер һикерһә, бөттө... Ә мылтыҡ атмай. Етенсе тапҡыр тоҫҡағанда курокка баҫҡан ыңғайға, минең дә һаҡланыу инстинктым телгә килгәндер инде, ныҡ итеп ҡысҡырып ебәрҙем. Шул ыңғайға мылтыҡ та атылып китте. Айыуым, яраланып, ҡанын ағыҙа-ағыҙа йырын яғына элдерҙе. Этем ярһып өрә. Айыу артынан юлланырға кәрәк, шулай ҙа, мылтыҡ эшкинерме, тигәнерәк шик тә бар. Йыуан йүкәгә менеп ҡараным - айыуҙың мороно күренеп ята. Атып ебәрҙем. Тейҙе. Шулай ҡотолдоҡ байтаҡ малды ҡырған айыуҙан.

Бер йылы ҡышҡыһын бүреләр ауыл эттәрен аулап бер булды. Ашайҙар ҙа ҡойроҡтарын ҡарға ҡаҙап китәләр. Етмәһә, эсәктәрен оҙон итеп һуҙып һалалар. Ауылдаш Низам ағай, мәрәкәләп, төндә бүреләр килеп ҡапҡа шаҡығайнылар, ана, Мөхәррәмдең өйө, шунда барығыҙ, тип өйрәтеп ебәрҙем, тип көлә. Икенсе көнө көлкөһө яңырған бының, эсе бошоп һөйләп тора - үҙенең этен ашап киткәндәр икән. Мин, миңә килгәйнеләр ул төндә, ана, Низам ҡарттың эте һимеҙ, шуға барығыҙ, тип ыңғайҙатып ебәрҙем, тип көләм. Көлкөһө - көлкө, теңкәне ҡороттолар былай.

Шунан бүреләрҙең ауылға төшөп йөрөгән юлдарына ҡапҡан ҡорҙом. Бер көн барып ҡараһам, эләгеүен эләккән, тик ҡапҡанды алып киткән. Юллап киттем. Китеп барһам, елле бер һеләүһен ултырмаһынмы. Аяғында тешле ҡапҡан. Саңғым менән һелтәнеп, өҫтөнә барып баҫтым. Таяҡ алып, осона бау бәйләп, һеләүһенгә тешләттем дә, теге тешләгән ыңғайға ауыҙын шаҡара бәйләп тә алдым. Ниәтем - тегенең ауыҙын ғына бәйләп, ауылға тереләй алып ҡайтыу. Атайым күрҙе лә, нимә ҡыланып йөрөйһөң ул, тей. Шунда атайҙан үҙемә ғүмерлек һабаҡ ишеттем- өйгә урман йыртҡысын тереләй алып ҡайтырға ярамай, тине. Йыртҡыстың йәнен урманда алырға кәрәк икән...

...Эйе, ирмен тигән ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр, тиҙәр. Хоҙай биргән һәләттәрен эшкә егеп, уға тырышлыҡ, дәрт, ныҡышмаллыҡ тигән үҙ ихтыярында булған төшөнсәләрҙе лә ҡушып, бына тигән итеп йәшәп ята геройым. Ир-егеттең көсө беләгендә, тиҙәр. Юҡ, йөрәгендәлер. Сөнки дәрте булмаған көслө кешенән ней фәтеүә. Ә Мөхәррәм ағай һымаҡ һәр яҡтан тырыштарға афариндан башҡа ни әйтерһең.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

## орден кавалерҙары

**Агишев Хөсәйен Буранбай улы** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙенән. 9-сы Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Аҡкөсөк Тимербаев** (А. Телембаев, Аҡуслор Т.) -Рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Поход йөҙ башы. Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙенән. 9-сы Башҡорт полкы составында 1813 йылда Лейпциг, Эрфурт ҡалаһын алыуҙа, 1814 йылда Лаон эргәһендәге алышта, Рейн йылғаһы эргәһендәге алыштарҙа һ.б. ҡатнаша. "Бигерәк тә 28 сентябрҙә Фрайберг ҡалаһы эргәһендә; 4 октябрҙә Мазин ҡалаһы эргәһендә; 6-7 октябрҙә Лейпциг ҡалаһы эргәһендәге алыштарҙа айрырыуса айырылып тора һәм ҡаһарманлығы өсөн 3-сө класлы Изге Анна ордены кавалерлығына тәҡдим ителә. Быны 1813 йылдың 30 ноябрендә Польша армияһы баш командующийы кавалерия генералы граф Бенигсендың 407-се дипломы ла раҫлай. Һуңынан 13 октябрҙә Эрфурт ҡалаһы, 1814 йылдың 23 ноябренән 13 ғинуарға тиклем Лаон блокадаһында, 1813 йылдың 20 ноябрендә Лаон ҡалаһы эргәһендә алыштарҙа ҡатнаша. 1814 йылдың 18 февралендә Павис ҡалаһы эргәһендә; 21-ендә - Элли ауылы эргәһендә; 24, 25, 26-һы - Лаонда; 7 мартта - Ремиз ҡалаһы эргәһендә; 13-дә - Дедин тигән урында намыҫлы хеҙмәте һәм тәртибе өсөн  1814 йылдың 5-се көнөндә 86 һанлы аттестат бирелә". 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ҡотлогилде Ишемғолов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Есаул (1825). Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Ҡыпсаҡ олоҫонон Бикес ауылынан (хәҙерге Күгәрсен районы, Бикес ауылы). 1806 йылдан хәрби хеҙмәттә. 1808 йылдан зауряд йөҙ башы, 1811 йылдан - поход старшинаһы. 9-сы Башҡорт полкы составында 1813 йылда Фрайберг ҡалаһы өсөн, Лейпциг алыштарында, Эрфурт ҡалаһын блокадалауҙа, Гамбург блокадаһында, 1814 йылда Парижды алыуҙа ҡатнаша һ.б. Бигерәк тә "6-7 октябрҙә Лейпциг ҡалаһы эргәһендәге" һәм "Навеса ҡалаһы эргәһендә ҡаһарманлыҡ күрһәтә, үҙенең тәрбиәләнеүселәренә дошман фронтына барып инеп өлгө күрһәтә, шунда уның аты һәләк була". 1818 йылдан - подпоручик, 1821 йылдан - йөҙ башы. 1824 йылдың декабренән 1825 йылдың сентябренә тиклем Александр Беренсенең һарайында хеҙмәт итә, гәүһәр йөҙөк һәм 1 мең һум аҡса менән бүләкләнә. 1828 һәм 1832 йылда 1828-1829 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышына һәм Польша батшалығына ебәреү өсөн 1-се һәм 8-се Башҡорт полктарын төҙөгән өсөн рәхмәт белдерелә. 1830-1837 йылдарҙа 9-сы башҡорт кантоны начальнигы ярҙамсыһы. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены (1813), "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Йәнмырҙа Ишкилдин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Хорунжий (1812). Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Ҡыпсаҡ олоҫонон Бикес ауылынан (хәҙерге Күгәрсен районы Бикес ауылы). 9-сы Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 3-сө дәрәжә Изге Анна ордены, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған. 14-се атлы полк 1812 йылдың 8 августында император указына ярашлы Ырымбур губернаһының Верхнеуральск өйәҙенең 6-сы кантоны башҡорттарынан төҙөлә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**



исеме менән атарға теләһәләр, Өфөнән ике тапҡырға киңерәк булған Ағиҙел исемен алырҙар ине. Бынан тыш, ҡаланан биш саҡырым тирәһе алыҫтараҡ Өфө йылғаһы буйында, бейек урында боронғо ҡаласыҡ урыны хәҙер ҙә күренеп ята. Бында нуғай хандары йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Ҡаласыҡ Өфө йылғаһы буйында урынлашҡанға күрә, Өфө тип аталған, күрәһең. Шунан күреп, Рәсәй төҙөгән ҡалаға ла Өфө атамаһы биргәндәр.

Нуғай даруғаһы Ҡаратабын олоҫонон абруйлы башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев аңлатыуынса, Ҡаҙан ханлығы ҡолатылып, башҡорттар Рәсәй тәхетенә ингәнгә тиклемге борон замандарҙа уҡ әлеге Өфө урынында бөйөк ҡала булған. Ул ҡала Ағиҙелдән Ҡариҙел йылғаһы тамағына тиклем, унан ары Ҡариҙел буйындағы Өфө тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан. Тимәк, ҡаланың киңлеге ун саҡырым тирәһе булған. Рустар килгәнгә тиклем ҡалала Түрә Бабату Ҡылысов исемле нуғай ханы йәшәгән. Ул бында ҡыш көндәре генә торған. Йәйен ҡаланан илле саҡырым алыҫлыҡта, Дим йылғаһы буйында йәйләгән. Хан ике урында - Аҡзыярат күле янында һәм Слаҡ йылғаһы эргәһендә йәйләр булған. Аҡзыярат күле янында Түрәхандың күп кенә йорттары торған. Хәҙер ҙә күл янында мәсет бар, ә Слаҡ буйында таш йорттар һәм мәсеттең емереклектәре күренә. Түрәхандың ҡул аҫтында булған нуғайҙар менән мең башҡорттарының 12 олоҫо һуҫар тиреһе, бал менән яһаҡ түләгән.

Әлеге Өфө торған урын борон Торатау тип йөрөтөлгән. Бында ҙур йылан килеп, ҡала халҡын үҙенең ағыуы менән һәләк итә башлағас, хан үҙенең нуғайҙары менән Дим буйына күсенә. Бер аҙ йәшәгәндән һуң, урыҫтарҙың Ҡасим ҡалаһын баҫып алыуы, артабан Ҡаҙанға яу менән килергә йыйыныуын ишетеп, ҡурҡып, Кубань тарафтарына киткән. Ә инде теге ағыу сәскән йылан, имеш, Ҡариҙел йылғаһы янындағы тауға инеп олаҡҡан. Артабан бер кемгә лә зыян итмәгән".

П.И. Рычков Өфөнө уратып алған тәбиғәт, ҡалала йәшәгән халыҡтар, ундағы соборҙар, ҡаланы һаҡлау ҡоролмалары тураһында ла әйтеп үтә. Шулай уҡ был бүлектә Бөрө, Минзәлә ҡалалары һәм улар тирәһендәге нығытмаларҙы ла тасуирлай.

Әйтергә кәрәк, П.И. Рычковтың "Ырымбур тарихы" һәм "Ырымбур губернаһы топографияһы" хеҙмәттәре бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған. Шуға күрә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәгенең Этнологик тикшеренеүҙәр үҙәге был китаптарҙы 1999, 2000 йылдарҙа аңлатмалар менән нәшер итте.

Шулай итеп, Петербург Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы П. И. Рычковтың ғилми хеҙмәттәре лә Өфө тарихын рус дәүере менән генә сикләмәй, ә унда борондан бирле ошо уҡ исемле Өфө ҡалаһы булған тип иҫбатлай.

**Айбулат ПСӘНЧИН,**
**география фәндәре докторы.**

✓ *Унынһы саҡ-саҡ интернатура бөтөргәс, бер ай реаниматолог булып эшләне лә, Нарьян-Марға китеп, ҡыҫҡа ваҡытлы курс тамамлап, хәҙер грейдерлы тракторҙа эшләй, айына 50-шәр мең аҡса ала.*



# ҺАУЛЫҒЫҢДЫ ҺАҠЛАУ...

## табиптың ғына түгел, үҙеңдең дә бурыс

**Медицина фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт медицина университеты профессоры Венер Ғәзиз улы Сәхәүетдиновты алтын ҡуллы хирург итеп кенә түгел, үҙ заманының зыялыһы һәм илһөйәр улдарының береһе, әүҙем тормош позициялы гражданин, үткер һүҙле публицист, яҙыусы булараҡ та беләбеҙ һәм ул беҙҙе күп яҡлы талант емештәре менән һоҡландырыуҙан туҡтамай. Яңыраҡ Венер Ғәзиз улы "Киске Өфө" гәзите редакцияһында булды һәм медицинаның бөгөнгө торошо, кадрҙар мәсьәләһе, сәләмәт йәшәү рәүешенә ҡағылышлы ҡайһы бер фекерҙәре менән уртаҡлашты.**

### Скальпель урынына - ҡәләм

Тормошобоҙҙа яман шеш, сиргә оҡшаш тиҫкәре күренештәр, аламалыҡтар йыш осрап тора, ана шулар мәжбүр итә лә инде ҡайһы саҡ ҡулға ҡәләм алырға. Бөтәһе лә "Башҡортостан" гәзитендә баҫылып сыҡҡан "Хирург яҙмалары"нан башланды. Ул яҙмаларҙы гәзит уҡыусылар яратып ҡабул итте. Шунан инде мин был гәзиттең даими авторына әйләндем, хатта йыл лауреаты ла иттеләр. 1997 йылда хажға барып ҡайтҡас, ошо сәфәрем тураһында тәүге китабымды яҙҙым. Хаж ғәмәлен үтәгән саҡта бик күп етешһеҙлектәргә юлығырға тура килде. Ул етешһеҙлектәрҙең барыһы ла беҙҙең ил граждандарын хаж ғәмәленә әҙерләмәйенсә, йүнле мәғлүмәт бирмәйенсә сәфәргә оҙатыуға ҡағыла ине. Яҙғандарымды шик аҫтына алып, бәғзе бер дин әһелдәре миңә ҡаршы ла сығып маташҡайны. Ләкин мин бит үҙ күҙҙәрем менән күргәндәрҙе генә бәйән иттем, бер ниндәй уйҙырмаға юл ҡуйманым. Мин был сәфәр барышына, ундағы хәл-ваҡиғаларға врач булараҡ ҡараным һәм баһа бирҙем. Хажға барыусыларҙың күпселеге өлкән йәштәгеләр, етмәһә, ауырыуҙар: береһенең йөрәге ауырта, икенсеһенең ҡапыл ҡан баҫымы күтәрелеп китә, танауы ҡанай, һ.б. Ә эргәләрендә медик юҡ. Ни эшләйһең -изге сәфәрҙә изге һөнәремә тоғро ҡалдым, һәр береһенә тейешле ярҙам күрһәттем.

Тәғәйен урынға килеп төшкәс, күнелде ҡырған күренештәр өҫтәлә генә барҙы. Ҙур мәсет эргәһендә баҙар ойоштторғандар, унда нимә генә һатмайҙар - Рәсәйҙән барған мосолмандар үҙ ғәҙәтенә тоғро, әлбиттә: барыһы ла иң тәүҙә һатыу-алыу эштәре менән мәшғүл булды. Хажға сауҙа итеү өсөн түгел, ә фарыз ғәмәлен үтәргә бараһың, тигән өгөт-нәсихәт ишетмәгән булып сыҡты уларҙың күбеһе. Донъяның кеме юҡ, тигәндәй, Ҡәғбәтулланы уратып йөрөгәндә 16 кешенең аҡсаһын ҡырҡып алдылар. Быныһы тағы ла ныҡыраҡ көйөндөрҙө: ошо тиклем изге урында шундай енәйәт ҡылырға кемдең йөрәге етер! Элгәреге хаж ҡылыу түгел шул инде хәҙер, борон бит был изге сәфәрҙе башҡарыу йылға һуҙылған: йәйәү барғандар, йәйәү ҡайтып ингәндәр. Барғандарының да ярттыһы ғына әйләнеп ҡайта алған. Ә хәҙер нимә: самолетҡа ултырҙың да 5-6 сәғәттән тәғәйенләнгән урынға барып та төштөң. Ғәфү итә күрегеҙ, ләкин был хаж ҡылыу түгел инде. Унан һуң, мосолман был сәфәрҙе үҙе тир түгеп тапҡан хәләл аҡсаһына ҡылырға тейеш, ә бер ниндәй ҙә бағыусы ярҙамы йә хәйергә төшкән аҡсаға түгел, юғиһә, был хилаф иҫәпләнә. Ә бөгөн, хажға барам, тип, бағыусы эҙләгәндәр күпме!

"Ихлас" мәсете һәм башҡа мәсеттәр минең ул мәҡәләне меңәрләгән данала китап итеп баҫтырып сығарҙы һәм уны ҡулланма рәүешендә шәкерттәренә, хажға барыусы мосафирҙарға таратып бирә башланы. Мәҡәләмдең ысынлап та файҙаһы тейҙе бит: хәҙер хажға барыусы төркөмгә мотлаҡ табип беркетәләр, бер сумка итеп дарыу һәм башҡа кәрәк-яраҡ бирәләр. Дин мәсьәләләренә төшөп киткәс, тағы ла шуны әйтәйем: дин әһеле тарафынан Ҡөрьән уҡыу түләүле булырға тейеш түгел! Әгәр был ғәмәлең өсөн саҙаҡа бирәләр икән, ул да мәсеткә тапшырылырға тейеш. Унан һуң, мулла булып йөрөгән күптәр Ҡөрьәнде төп нөсхәһенән, ғәрәп яҙмаһындағыһынан уҡый белмәй. Тимәк, ул тулы ғилемле түгел, тексты хаталы уҡый йәки уҡығанының мәғәнәһенә төшөнмәй, сөнки ғәрәп телен белмәй. Минең олатай була торғайны. Ҡөрьән-Кәримде ғәрәпсә уҡый ҙа шул ыңғайы тәржемә итеп тә барыр ине. Хәҙер әлепте таяҡ тип белмәгәндәр мулла булып йөрөй. Атайым мәрхүм булғас, элек тракторсы булып эшләгән бер мулла килгәйне.Мин хәсрәтмәшәҡәттәргә бирелеп, абайламағанмын, ҡустым: "Ағай, был бит ясин урынына никах уҡып китте",- ти. Бына ошондай хәлдәрҙән һуң ҡулыңа нисек ҡәләм алмайһың. Әйтә торған фекерҙәр шундай күп йыйылып китә ҡайһы саҡ. Әлеге хажға барыу тураһындағы китап менән дә шулай булғайны: бер туҡтамай, тәүлек буйы бер ҡайҙа сыҡмай ултырып яҙҙым. Аҡ ҡағыҙға төшөрәһе һүҙҙәрем шишмә һымаҡ урғылып сығып торҙо, үҙем дә ғәжәпкә ҡалдым. Ул саҡ атай иҫән ине әле, мәҡәләне уҡыны ла: "Арыу ғына килеп сыҡҡан бит, һин яҙышыуҙы дауам ит, улым", - тине. Унын ана шул хуплау һүҙҙәре күнелгә инеп ултырҙы ла инде.Шул ваҡыттан алып үҙебеҙҙең башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙа ғына түгел, "АиФ","Московский комсомолец","Республика Башкортостан" кеүек русса баҫмаларҙа ла 200-ләп мәҡәләм донъя күрҙе. Әлеге ваҡытта үҙебеҙҙең элекке бөйөк шәхестәребеҙ - Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау системаһына нигеҙ һалыусы иң ҙур медицина әһелдәре тураһында яҙам, был йүнәлештә материал туплауҙы дауам итәм. Ә китап оҙаҡламай "Ғилем" нәшриәтендә донъя күрәсәк.

### Бөгөнгө медицина сирле кешене хәтерләтә...

Ниндәй генә өлкәне алһаҡ та, эштең уңышын кадрҙар хәл итә, медицинала бигерәк тә. Шуға күрә лә бөгөн үҙ һөнәренә мөкиббән табиптар әҙерләү үҙәк мәсьәлә булып тора. Ләкин ҡайҙан алаһың ул "мөкиббән"дәрҙе? Медицина университетына уҡырға килгән студенттарҙың яртыһы тип әйтерлек был вузды осраҡлы һайлаған. Мәктәптә 4-5-кә генә уҡып, миҙалға бөтөргән балалар ҙа килә бында, тик улар конкурстан үтә алмай, сөнки уларҙың урынын илке-һалҡы ғына уҡып йөрөһә лә, туғанлыҡ йә танышлыҡ буйынса район хакимиәтенән йүнәлтмә алып килеүселәр биләй. Һөҙөмтәлә уларҙан наҙан "белгестәр" сыға, ә яҡшы уҡыған балалар ситкә - Мәскәү, Санкт-Петербург йә башҡа ҡалаларға сығып китә, уларҙың республикаға әйләнеп ҡайтмауҙары ла ихтимал. Урынлы һорау тыуа: хакимиәт башлыҡтарының мәктәп тамамлаусыларға йүнәлтмә бүлеп ултырырға ни хаҡы бар һуң әле? Әгәр хаҡы бар икән, ни өсөн ул хоҡуҡи нигеҙләнмәгән? Ә бит район хакимиәте йүнәлтмә биреп уҡытҡан студентҡа стипендия түләргә тейеш һәм фәҡәт шундай шарт менән: уҡып бөткәс, йәш белгес мотлаҡ ошо районға эшкә ҡайтырға бурыслы. Мәсьәләне бына шулай ҡуйғанда, районлар врачтар етешмәүҙән яфа сикмәҫ ине.

Әйткәндәй, былтыр медицина хеҙмәткәрҙәре алдында сығыш яһап, республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитов, Башҡорт дәүләт медицина университетын тамамлаған 700 белгестең ни бары 17 процентының ғына эшкә урынлашыуы хаҡында борсолоу белдергәйне. Мәғлүм булыуынса, быйыл яҙ гәзиттәрҙә ауыл райондарына даими эшкә табиптар саҡырыусы иғландар күп баҫылды. Уларҙы уҡып, илағы ла, көлгө лә килә. Мәҫәлән, бер районға юғары белемле табипты 4 990 һум эш хаҡы менән саҡыралар, уға шулай уҡ балалар баҡсаһынан урын һәм бушлай ер участкаһы вәғәҙә итәләр. Меҫкен табип, был районға барырға риза булған хәлдә лә, бушлай алған ерен соҡоп, "землянка" яһап, шунда йәшәргә тейеш буламы икән? Бындай шарттарға берәү ҙә риза булмаясаҡ, әлбиттә. Хәйер, бөгөн врачтарҙың уртаса эш хаҡы 20 меңдән ашыу бит, тип әйтерҙәрен белеп торам, шуға күрә белмәгәндәр өсөн аңлатам: был сумма врач иңенә өҫтәмә йөк һалыу һәм дежурлыҡ итеү һөҙөмтәһендә туплана. Айлыҡ эш хаҡың 15 мең тәшкил итһен, тиһәң, больницала айына 12 тапҡыр тәүлек әйләнәһенә дежурлыҡ итергә тейешһең. Ошоға бәйле бер райондағы баш табиптың улы менән булған хәл иҫкә төшә: улын мәжбүр итеп тигәндәй, илле алла, алтмыш мулла менән врачлыҡҡа уҡытып сығарҙы был. Унынһы саҡ-саҡ интернатура бөтөргәс, бер ай реаниматолог булып эшләне лә, Нарьян-Марға китеп, ҡыҫҡа ваҡытлы курс тамамлап, хәҙер грейдерлы тракторҙа эшләй, айына 50-шәр мең аҡса ала.



*Медицина университетына уҡырға килгән студенттарҙың яртыһы тип әйтерлек был вузды осраҡлы һайлаған. Мәктәптә 4-5-кә генә уҡып, миҙалға бөтөргән балалар ҙа килә бында, тик улар конкурстан үтә алмай, сөнки уларҙың урынын илке-һалҡы ғына уҡып йөрөһә лә, туғанлыҡ йә танышлыҡ буйынса район хакимиәтенән йүнәлтмә алып килеүселәр биләй. Һөҙөмтәлә уларҙан наҙан "белгестәр" сыға, ә яҡшы уҡыған балалар ситкә - Мәскәү, Санкт-Петербург йә башҡа ҡалаларға сығып китә, уларҙың республикаға әйләнеп ҡайтмауҙары ла ихтимал. Урынлы һорау тыуа: хакимиәт башлыҡтарының мәктәп тамамлаусыларға йүнәлтмә бүлеп ултырырға ни хаҡы бар һуң әле? Әгәр хаҡы бар икән, ни өсөн ул хоҡуҡи нигеҙләнмәгән? Ә бит район хакимиәте йүнәлтмә биреп уҡытҡан студентҡа стипендия түләргә тейеш һәм фәҡәт шундай шарт менән: уҡып бөткәс, йәш белгес мотлаҡ ошо районға эшкә ҡайтырға бурыслы. Мәсьәләне бына шулай ҡуйғанда, районлар врачтар етешмәүҙән яфа сикмәҫ ине.*

## Уҡытыусы күҙәтеүҙәре

Ҡырҡ биш йылдан ашыу медицина университетында уҡытам. Һуңғы ун йылда шундай күренештең шаһитымын: хирург булырға теләгән студенттарҙы бармаҡ менән генә иҫәпләргә мөмкин. Беҙ эшләгән замандарҙағы хирург һөнәренә хас булған энтузиазм һәм романтика тамам юҡҡа сыҡты, сөнки уның матди нигеҙе - хеҙмәтенә күрә тейешле түләү юҡ. Академик һынлы академиктар менән профессорҙарға ауырыуға операция яһаған өсөн ( операция ниндәй генә ҡатмарлы булмаһын) ни бары 1 700 һум аҡса түләнә, шуға университет тамамлаған белгестәр уҡытырға ла килмәйҙәр. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "тырышлығы" менән медвуз уҡытыусыһы бер кем дә түгел. Уның табип стажы юҡ, студенттарын өйрәтеү маҡсатында уның операция эшләргә лә, обход яһарға ла, хатта ауырыуҙың йәрәхәтен бәйләп күрһәтергә лә хаҡы юҡ. Дөрөҫөрәге, бының өсөн уны больница штатына сирек ставкаға врач-дежур итеп алыуҙарын үтенеп, үҙенең уҡыусыһы - баш табипҡа ғариза менән мөрәжәғәт итергә тейеш. Шуға ла ғәжәп түгел: хәҙер йәш белгес-табиптарҙың күпселеге ауырыуға банка ҡуйырға ла, клизма яһарға ла, венаға укол эшләргә лә, бала табыусыға нисек ярҙам итергә лә белмәй.

Был йәһәттән минең үҙ фекерем бар: медицина университетына бөтөнләй әҙерлекһеҙ мәктәп балаһын түгел, ә медучилище, колледж бөткәндәрҙе генә ҡабул итергә кәрәк. Был фекеремде әлеге студенттар араһында үткәргән тест һөҙөмтәләре лә ҡеүәтләй: мәктәпте тамамлап килгәндәрҙең 95 проценты, буласаҡ һөнәремде һайлауҙа яңылышҡанмын, тип , ә медучилище бөтөрөп килгәндәрҙең 96 проценты, һөнәрҙе дөрөҫ һайлағанмын, тип яуап бирә. Әйткәндәй, халыҡты медицина хеҙмәтләндереүен һауыҡтырыуҙа, кадрҙар мәсьәләһен хәл итеүҙә әле яңыраҡ сығарылған земство табибы программаһының да ҡотҡарыуы икеле, сөнки бер тапҡыр миллион түләү менән генә хәлде үҙгәртеп булмаясаҡ, әгәр эш хаҡы әлеге кимәлдә ҡала килһә... Ә, ғөмүмән, кем һуң ул земство докторы? Уны гәзит уҡыусы билдәле рус яҙыусыһы Антон Чехов әҫәрҙәре буйынса ла асыҡ күҙ алдына килтерә торғандыр. 19-сы быуатта земство табибына хеҙмәтенә күрә лайыҡлы эш хаҡы түләнгән, уның үҙ аттары, көймәле кырандасы-санаһы, күсере, ярҙамсыһы, ҙур йорт-хужалығына идара итеүсеһе булған. Земство врачы ике-өс йылға бер Германияла йә Австрияла стажировка үткән. Ғаиләһе менән Карловы Вары йәки Баден-Баденға ялға барған. Әгәр бөгөн дә шундай шарттар булһа, ауылда эшләргә теләүсе табиптарҙы саҡырып инәлмәҫтәр, ә ҙур конкурс буйынса һайлап ҡына алырҙар ине.

## Кем әҙерәк ауырый, шул бай

Бөгөн беҙҙә медицина хеҙмәте күрһәтеү фәҡәт аҡсаға ҡоролған. Түләүле медицина яйлап ҡына үҙ позицияларын ала бара. Әле беҙҙә 250-нән ашыу шәхси клиника эшләй, унда, тәбиғи, кеҫәһе ҡалындар ғына дауалана ала. Тәжрибәле табиптарҙың күбеһе ана шул коммерция учреждениеларына китеп бөтөп бара. Көнө-төнө граждандары һаулығы һағында торған медицина хеҙмәткәрҙәренә иң аҙ эш хаҡы түләүсе илдәр - Рәсәй ҙә Монголия, ә башҡа илдәрҙә табип хеҙмәте юғары баһалана. Ә студенттарҙы ҡарағыҙ: 1 100 һум стипендияға нисек йәшәй икән улар?

Медицина өлкәһен үҫтереү өсөн бүленгән аҡсаға ҡиммәтле сит ил аппаратуралары, башҡа төрлө йыһаздар һатып алына, ләкин шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: ғәҙәттә, бындай ҡатмарлы ҡорамалдар менән диагностикалау һәм дауалауға халыҡтың ни бары 2 процент өлөшө генә мохтаж. Медицина өсөн иң мөһиме - кешенең ауырыу хәленә барып етеүенә юл ҡуймау, кеше һаулығы хаҡында ул сирләгәс түгел, ә алдан ҡайғыртыу. Ә бының өсөн беҙҙә нимәләр эшләнә һуң? Элек, исмаһам, врачтар халыҡтың эш урынына, цехтарға килә ине. Токарь, мәҫәлән, эш урынынан бер-нисә минутҡа ғына айырылып, йәһәт кенә врачта тикшерелеп сыға торғайны. Был бигерәк тә әлеге ваҡытта, врачҡа әләгеүе проблема булған заманда кәрәк ине. Юғиһә, уйлап ҡарағыҙ: участка терапевына бер кешене ҡабул итеүгә ни бары 8 минут ҡына ваҡыт бирелә. Ошо ваҡыт эсендә ауырыуға сисенеп, кейенергә лә кәрәк.

Медицинала бөтә эш кеше һаулығын һаҡлауға йүнәлтелергә тейеш, тигәйнем, ә беҙ сирҙәрҙе дауалауҙан бушамайбыҙ. Ошо йәһәттән медицина страховкаһын был тармаҡ үҫеше алға киткән сит илдәр өлгөһөндә ҡорорға, уны сәләмәтлек культына әүерелдерергә кәрәк. Мәҫәлән, американлылар араһында иң шәп маҡтаныу һәм ғорурланыу сәбәбе - бер тапҡыр ҙа сирләмәү факты. Бына 40 йыл буйы бер ҙә ауырыманым, тип маҡтана ул, ә ошо арала уның страховка суммаһы байтаҡ ҡына йыйылып тора. Пенсияға сыҡҡас, ошо аҡсаға улар төрлө илдәргә сәйәхәт итә. Йә булмаһа, япондар тәжрибәһен алып ҡарайыҡ. Уларҙа ла шул уҡ принцип: кем әҙерәк ауырый, шул байый. Ә беҙ бындайҙы белмәйбеҙ. Беҙ мотлаҡ медицина страховкаһы өсөн түләйбеҙ, ә ул аҡсаның ҡайҙа киткәнен белмәйбеҙ.

## Табипҡа ышан, тик үҙең дә һаҡлана күр

Әйтегеҙ әле, һеҙ берәй хакимиәт башлығының үҙ районы йә ҡалаһы больницаһында дауаланғанын күргәнегеҙ бармы? Юҡ, улар баш ҡалаларҙа түрәләр өсөн махсус, элиталы шарттарҙа, бер нисә бүлмәле иркен палаталарҙа дауалана. Шуға күрә лә улар урындарҙағы проблемаларҙы белмәй, күрергә лә теләмәй. Ауыл кешеһе ҡапыл сирләп киткән хәлдә ашығыс ярҙамды ла саҡыртып ала алмай, килмәйҙәр. Ошондай мөнәсәбәтте күреп торған ауыл халҡына бер генә юл ҡала: үҙ һаулығыңды мөмкин тиклем һаҡла, сәләмәт тормош рәүеше алып бар. Ғүмерең ҡәҙерле икән - араҡы эсмә, тәмәке тартма, майлы аҙыҡтар менән һәм, ғөмүмән, артыҡ күп ашау менән мауыҡма, тиер инем ябай ғына итеп әйткәндә.

Шуныһы яҡшы: ауыл кешеһе барлыҡ төп ризыҡтарҙы ла үҙ хужалығында етештерә. Ә ҡаланыҡыларға аҙыҡ-түлек һатып алған саҡта һағыраҡ булырға кәрәк. Мин үҙем, мәҫәлән, магазинға йөрөмәйем. Ҡатыным хатта икмәкте лә өйҙә бешерә. Бөтөн ризыҡта химикат, консервант, буяу, һәр төрлө ҡатнашмалар, яһалма тәмләткес һәм башҡа шундай нәмәләр ҡушылып етештерелеүе тураһында хәтерҙән сығырырға ярамай. Хирургия сирҙәре араһында беренсе урында - ашҡаҙандың сей яраһы. Бының сәбәптәре бик күп, ә шулай ҙа сифатлы һәм экологик йәһәттән таҙа ризыҡҡа өҫтөнлөк биреү, ваҡытында туҡланыу мөһим. Юҡ-барға янып-көймәҫкә, нервыларыңды һаҡларға, эмоцияларыңды көйләргә өйрәнергә, мөмкин булғанса тыныс тормош алып барырға кәрәк. Унан үт ҡыуығында таш сәбәпле мөрәжәғәт итеүселәр ҙә бик күп. Был йәһәттән күберәк һыу эсергә кәңәш бирер инем. Һәр саҡ хәрәкәттә булырға, йүгерергә, күберәк йәйәү йөрөргә тырышырға кәрәк. Һәр кемдең ҡулынан килерлек ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе тотоу - сәләмәтлектең нигеҙе икәнен онотмағыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, бөгөнгө медицинаны белемле һәм үҙе һайлаған һөнәрҙе яратҡан кадрҙар ғына күтәрә аласаҡ, ә кадрҙар мәсьәләһен ошо изге һөнәргә лайыҡлы эш хаҡы түләп кенә хәл итергә мөмкин. Венер Ғәзиз улы әйтмешләй, иң һәләтле һәм тәжрибәле врачтар шәхси клиникаларға китеп бөттө. Хәйер, муниципаль медицина учреждениелары ла бөгөн хужалыҡ иҫәбе принциптарына күсеп бөтөп бара. Тиҙҙән "түләүһеҙ медицина" тигән һүҙбәйләнеш ил Конституцияһында ғына тороп ҡалыр, ахырыһы...**

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

МАТУР ХӘТИРӘЛӘР

# КҮҢЕЛ ЙОМАРТЛЫҒЫ...

## теге быуатта тороп ҡалдымы?

**"Киске Өфө"нөң 38-се һанында Таңһылыу Баһауетдинованың студент йылдары хәтирәләрен уҡып, үҙемдең ошо матур сағымды хәтергә төшөрҙөм.**

Ул йылда имтихандарға һуңлай яҙҙым. Шуға поездан төшөү менән тура институтҡа киттем. Тәүҙә ижади эштәрҙе ҡабул итеү, һуңынан әңгәмә үтә торған бүлмәгә сират торорға тура килде. Арыйһыңмы, талаһыңмы, һыуһайһыңмы, асығыһыңмы - ул тойғолар башҡа инеп тә сыҡмай, "Имтиханға үткәрһәләр ярай ине" тигән бер уй ғына биләй. Сиратта торғанда бер ҡыҙ менән танышып алам. Ул Жанна исемле, Ҡырым ярымутрауынан килгән. Бына, ниһайәт, имтиханға рөхсәт алып, дөйөм ятаҡҡа киттек. Барып таптыҡ та, тик комендант эшен тамамлап, ҡайтып киткән. Вахтер рөхсәт ҡағыҙҙарыбыҙҙы алып, булмаһа, ошо йомшаҡ креслоларҙа ултырып йоҡларһығыҙ инде, ти көрһөнөп. Жанна бер креслоға, мин икенсеһенә ултырҙыҡ. Сумаҙанымдан Рауза бүләк иткән ҙур, суҡлы шәлемде алып бөркәнеп, ныҡ арыу-йонсоуҙан шунда уҡ йоҡоға талдым. Кемдендер шәл ситен асып ҡарап: "Ә быныһы бөтөнләй бала ғына", - тип әйтеүенә уянып киттем. Бала түгелмен, әлбиттә, тиҙҙән 19 йәш тула. Буйым бәләкәй һәм ҡаҡса һынлымын. Балалар йортонда үҙебеҙҙе "военный выпуск" (йәғни һуғыш йылдарында тыуғандар) тип атап көлөшә инек. Ә Римма, беҙ гномдар, тип тә өҫтәй ине. Шунан был ханым беҙҙе үҙенә алып ҡайтып китте. Йыуынып, йылы һөт эсеп, ике кеше һыйырлыҡ карауатҡа сумып, иҙрәп йоҡлап киттек. Иртәнсәк "Балалар уянығыҙ, сәй һыуына", тип уятты апай. Сәй эсеп, һаубуллашҡанда, мин "Рәхмәтебеҙҙе нисек белдерәйек, аҡса бирәйекме?" тип һораным, ҡурҡып ҡына. "Минең улым да Ленинградта уҡып йөрөй, юлында һәйбәт кешеләр осраһын, тип теләһәгеҙ, шул еткән", - тип йылмайҙы апай. Аҙаҡ имтихандар, тетрәнеүҙәр, борсолоуҙар, күсенеүҙәр, урынлашыуҙар. Апайҙы иҫкә төшөрөр рәт тә булманы. Йәшлек бит, йә һине һөйөп, инәлеп йонсоталар, йә һин үҙең мөхәббәт уттарында янаһың. Йылдар үтә торҙо. Олоғая барған һайын, ул апайҙы бик йыш иҫкә төшөрөп, рәхмәттәр уҡыйым. Эйе, әлеге заман кешеһе аңлай алмаҫ эскерһеҙлек, хәйләһеҙлек, йомартлыҡ егерменсе быуатта тороп ҡалды шикелле инде.

Тағы ла Таңһылыу һылыуҙың "Бабай" иҫтәлеген уҡып сыҡҡас, шуға оҡшаған юл иҫтәлегемде яҙырға булдым. 4-се курста уҡығанда 2 айға Калининград өлкәһе Янтарный ҡасабаһына ювелир һөнәрен өйрәнергә практикаға барғайным. Бер айы ҡыш, бер айы яҙға тура килгәс, ҡышҡы өҫ кейемен дә, яҙғыһын да алырға тура килде. Практика тамамланды, "4-се разрядлы гәрәбә эшкәртеү өҫтаһы" тигән документ та бирҙеләр. Ике сумаҙанымды тотоп, ҡайтырға сыҡтым, тик көндөҙгө поезға өлгөрмәнем. Киске поезды көтөргә тура килде. Калининградтан Мәскәүгә төнөн генә килеп төштөм. Метро, автобустар иртәнге 6-ла йөрөй башлағанға күрә, вокзал бинаһындағы бер эскәмйәгә урынлаштым. Шул саҡ урта йәштәрҙәге бер ир, рөхсәт һорап, эргәмә ултырҙы. "Буш урындар күп бит", - тип әйткем килһә лә, өндәшмәнем. Бик арыу сәбәпле, һөйләшеп ултырырлыҡ кәйефем юҡ ине. Кем урамда таныша? Ул ир төрлө ҡыҙыҡ-мәҙәктәр һөйләп, көлдөрөп тә алды. Таныш булмаған кешенең һүҙсәнлеге шикләндерә, әлбиттә. Шулай ҙа түҙәһең, төн буйы көтөргә бит. Бына таң да атты, был ир сумаҙанымдың иң ауырын күтәрешеп, автобусҡа ултырырға ярҙам итеп, үҙе лә инеп ултырҙы. Аҙаҡ мине дөйөм ятаҡтың ишегенә тиклем оҙатты ла: "Бына, иҫән-һау ҡайтып еттең, - тине. -Вокзалда ике ирҙең һиңә төртөп күрһәтеп, был ҡыҙҙы таларбыҙ, бер сумаҙанын эләктереп, һин бер яҡҡа, мин бер яҡҡа йүгерһәк, ҡысҡырып тороп ҡалыр шунда, тип һөйләшкәнен ишетеп, янына килеп ултырҙым. Вокзалдарҙа бурҙар яңғыҙҙарҙы һағалап ҡына йөрөй ул, автобустарҙа ла талаусылар күп була", - тип, һаубуллашты. Ә мин эстән генә уны, ниндәй бәйләнсек ир, тип әрләп бөткәйнем. Сумаҙан эсендә үҙ ҡулдарым менән гәрәбәнән яһалған ювелир биҙәүестәр, көмөш ялатылған сылбырҙар, Балтика диңгеҙе ярҙарында йыйған эшкәртелмәгән гәрәбә таштары тулы ине. Практиканы йомғаҡлау үткәс, бөтөн эштәремде уҡыу йорто музейына тапшырайым, тигәйнем, уҡытыусы ағай, күп өлөшөн үҙеңдә ҡалдыр, тине. Уларҙы курсташтарыма бүләк итеп бөттөм, үҙемә бер кулонын ғына ҡалдырҙым, ниңәлер, биҙәүестәр тағып йөрөргә яратмайым. Уҡыу йортон тамамлап, бер-ике йыл үткәс, курсташымды осратҡайным, ул: "Эй, һин, һантый, бөтөн ҡиммәтле биҙәүестәреңде беҙгә өләштең дә бирҙең, бер салонға тапшырып, аҡса эшләр урынға", - тип йылмайҙы. Буштан ҡулға килеп эләккән әйберҙәрҙе һатыу, тигән уй совет кешеһенең башына ҡайҙан килһен инде? Тик йомартлыҡты ахмаҡлыҡ тип ҡабул итеүселәр ул заманда уҡ булған икән шул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең быуын хаттар көтөп, хаттар яҙышып йәшәне, ул ғәҙәт матур хәтирә булып ҡаныбыҙға һеңешкән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер ул ғәҙәт онотола бара. Бына "Киске Өфө"лә лә матур мәҡәләләр яҙыла, шундағы фекерҙәргә эйәреп, уҡыусылар хат яҙырмы икән, тип көтөп, күҙәтеп йөрөйөм дә, тағы үҙем ҡулға ҡәләм алам. Ҡайһы бер фекерҙәргә эйәрмәйенсә түҙеп булмай, башҡалар нисек түҙә икән? Шуға ла мәктәп йылдарында уҡ хәтеремә һеңеп ҡалған бер шиғыр менән тамамлайым хатымды:**

**Ҡоштар яҙын ҡайтҡан һымаҡ, кис, иртән,**
**Ышанам мин хатың килер, мин көтәм.**
**Хатыңдың һәр юлынан көс алып,**
**Ижадымда үҫкем килә нурланып.**
**Ҡош телендәй булһа ла хат яҙ, иркәм...**

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы.*
*(Башҡорт халыҡ йыры "Азамат")*

**Билдәле яҙыусы Иҙрис НОҒОМАНОВ Әбйәлил районының Ҡырҙас ауылында йәшәй. Уның бер кемдекенә лә оҡшамаған мажаралы һәм ҡыҙыҡлы сюжетҡа ҡоролған, халыҡтың йәнле һөйләү тел-стиль үҙенсәлектәре менән ижад ителгән халыҡсан проза әҫәрҙәрен әҙәбиәт һөйөүселәр яратып ҡабул итә. Автор уҡыусыларға төрлө йылдарҙа донъя күргән "Ауыл хикәйәләре", "Әсәйгә бүләк", "Ғүмерлек һағыш" китаптары, "Һаҡмарбаш", "Яҙлыҡҡан яҙмыштар" романдары, "Ҡашҡа", "Аждаһа эҙенән", "Ир иткән дә, ер иткән дә", "Күк Ирәндек ҡуйынында", "Әрме яҙмалары" повестары һәм дүрт тиҫтәгә яҡын хикәйәләре менән яҡшы таныш. Уның юғарыла телгә алынған бер нисә повесы "Киске Өфө" сәхифәләрендә лә баҫылды, Иҙрис Ноғоманов бер нисә тапҡыр гәзитебеҙҙең йыллыҡ лауреаты ла булды.**
**Иҙрис Ноғоманов әҫәрҙәренең халыҡ тарафынан яратып уҡылыуының сәбәптәрен беҙ уның ғүмере буйына халыҡ тормошоноң төп ваҡиғалары барған ауылда, халыҡ араһында халыҡ тормошо менән йәшәүендә лә күрәбеҙ. Ошо көндәрҙә яҙыусы 60 йәшлек юбилейын билдәләй. Уға ныҡлы һаулыҡ, ейән-ейәнсәрҙәр шатлығы, ижади ҡәләменең һәр ваҡыт шулай халҡыбыҙ рухындай сая, үткер, ҡотло булыуын теләйбеҙ! Автор был юлы һеҙҙең иғтибарға халыҡ риүәйәтенә таянып ижад ителгән "Ҡаҙаҡҡар" тигән хикәйәтен тәҡдим итә.**




Ҡулдарын, ололарса, баш ҡаҫтына ҡыҫтырған көйө уйҙарға бирелә-бирелә, һуйыр-ташты ҡаплап үҫкән йомшаҡ та, ҡоро ла мүк өҫтөндә моңһоҙ ятҡан Ғайса баянан бирле үҙҙәре тәңгәлендә әйләнгән аҡ башлы бөркөттө күҙәтә. Шул рәүешле туктауһыҙ нимә эҙләй ҙа, нимә көҫәй ул зәп-зәңгәр төпһөҙ бушлыҡтар хакимы? Йыртҡыс башҡа саҡта тауыш-тынһыҙ ғына осор ине, ә бөгөн, ни сәбәптәндер, туктауһыҙ саңҡылдыһын сыға. Уның ошолай ҡыланыуында берәй әтнәкә юкмы икән?

- Олатай, ә бөркөт нинә ҡысҡыра ла ҡысҡыра ул?

- Өлләкәйҙағы ҡорбанын шәйләп ҡалғанда шулай итә, улым. Йәнә лә - ояһына ҡурҡыныс янағанда. Хатта кешеләрҙе лә иҫкәртә белә ул, - уң ҡулын ҡашы өҫтөнә ҡуйған Ғәббәс ҡарт, күҙҙәрен ҡыҫа биреп, һауаға ҡарай. - Шул ҡәҙәре аҡыллы ҡош бит ул бөркөт. Аҡыллы ла, аңлы ла.

Күптән түгел генә ун дүртенсе йәйен ҡаршылаған Ғайса бөгөн олатаһы Ғәббәс ҡарт менән һағауылда тора. Әле, ғәҙел сират буйынса олатаһы күҙәткән, ә ейәне ил иткән мал. Торған урындары Уралтау һыртының ошо тирәләге индән-иң бейек түбәһе. Әлеге түбәнән яҡын-тирә генә түгел, әллә ҡайҙарҙа ослайышып торған аҡ таштар ҙа ус төбөндәге кеүек асыҡ күренә.

Һуңғы осорҙа ҡыян дала халҡы тынғылыҡ күрһәтмәй башланы. Көтмәгән-уйламаған ерҙән килеп сыға ла, йә малыңды ҡыуып алып китә, йәиһә ҡыҙ-ҡыркынды урлай. Ир-егеттәр ғәйеп булған осраҡтар ҙа юҡ түгел. Ана шул хәсистәрҙән һаҡланыу маҡсатында ауылдары менән сират буйынса изге һағауыл хеҙмәтен үтәп ятыуҙары.

Арыраҡ, яҫы таш өҫтөнә мул ғына ҡоро сыбыҡ-сабыҡ ҡатыштырып эре-тәрә үлән һабағы, ҡарағай мүге өйөп ҡуйылған. Һағауылда тороусыларҙың бурысы: ниндәй ҙә булһа хәүеф-хәтәр янағанда, ана шул сүмәләгә үрт һалып, ауылдаштарын, башҡа ошо тирәләге бүтән ауыл кешеләрен дә көнәлгәре иҫкәртеүҙән ғибәрәт.

- Олатай...

-Әү...

- Ә был түбә нилектән Ҡаҙаҡҡар тип атала?

-Ишетер ҡолаҡҡа уның исеме үк әйтеп тора, улым. Ҡаҙаҡҡар - ҡаҙаҡ ҡарауылы. Сәбәбе лә ябай ғына: беҙҙең тирәлә күберәген күрше ҡаҙаҡ ҡәүеме барымтасылары темеҫкенеүсән, - уйсанланып киткән Ғәббәс бабай йоҡа ғына кәзә һаҡалын һыйпаштырып ҡуя. - Башҡорттоң ябай, бер ҡатлыраҡ һәм эскерһеҙ ҡунаҡсыл икәнлеген улар яҡшы белә. Белеүен белә, әммә, ҡайсаҡ, ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул, тигәнде хәтеренән сығарып ебәрә. Оҙаҡ зитына тейеп, ғәҙелһеҙ ҡыланһаң, һай, яман бит ул бер ҡатлы башҡорт. Ирлек намыҫы менән ырыу бәсен һаҡлап ҡалыу хаҡына йәнен йәлләмәҫ, дошманына арыҫлан ише ташланыр...

Арыҫлан затлы башҡорт кешеһе өсөн ғорурлыҡ тойғолары кисергән Ғайса олатаһына ҡарап ала. Ә уныһы һаман әллә ҡайҙарға текәлгән көйө тора. Шулай, хатта һөйләгәнендә лә ул уаулығын юғалтмай. Тағы ла, алтынсы тиҫтәне тултырып килеүенә ҡарамаҫтан, ул күҙҙәренә һис зарланғаны юҡ, шөкөр. Бабайҙың атлап йөрөшө генә түгел, ә бар булмышы әле булһа йәштәрсә. Ҡаҙаҡ исемен ишетеү менән маңлай һырҙары тәрәнәйеп, сырайы ҡараңғылана төшкәндәй күренгән Ғәббәс ҡарт тап-таҡыр итеп ҡырылған башындағы йәшел түбәтәйен рәтләй, елкәһен тырнап ҡуя.

- Эйе... Башҡаға нужа күрһәтеү, этлек эшләү тигәндә дала халҡы аптырап тормай, - бабай, үҙ алдына һөйләнгәндәй, ауыр уфтанып ҡуйҙы, - уларҙың тик үҙҙәре генә рәхәт йәшәһен. Ҡыҫҡаһы, әҙергә ҡыҙығып ҡына баралар...

- Олатай...

- Әү...

- Беҙҙең ауылда ла ҡаҙаҡтар бар ҙа.

- Бар... Ҡаҙаҡтар араһы. Тик улар, башҡортлашып бөтһәләр ҙә, барыбер ҡаҙаҡ нәҫеленән. Дөрөҫөрәге, тамырҙары уларға барып тоташа.

- Ә улар беҙҙең яҡтарға нисек килеп сыҡҡан һуң?

- Һөйләй китһәң, улым, тарихы оҙон уның, - тип һамаҡлағандай итте олатай кеше, - имеш, бынан бихисап йылдар элек баҫҡынсылар, арттарынан ҡыуа төшкән башҡорттарҙан ҡасып барышлай, бер малайҙарын әллә юғалтып, әллә юрый ташлап китә. Ике йәшлек сабыйҙы табып алған ҡарымтасылар уны үҙҙәре менән алып ҡайта һәм шул көндән ҡаҙаҡ малайы башҡорттар араһында тәрбиәләнеп аяҡҡа баҫа. Мәле етеп, егет ҡорона инеүгә үҙе кеүек ярлы ғына етем ауыл ҡыҙына өйләндерәләр. Ҡаҙаҡтар араһы ана шул икәүҙән таралып китә лә инде.

- Ҡыҙыҡ...

- Тағы ла, ҡасандыр әсир төшөп ошонда төләк типкән ҡалмыҡ затынан таралған ҡалмыҡтар араһы ла, үҙ ирке менән Ислам динен ҡабул ҡылып, башҡортлашҡан урыҫтар ҙа бар беҙҙә.

- Һәләк ҡыҙыҡ икән,- тип уйҙар диңгеҙенә сумып бер аҙға шым ҡалған Ғайса, - ә һин быларҙы ҡайҙан беләһең, олатай?

- Нисек белмәҫкә? Заманында һинеке кеүек минең дә атайым менән олатайым бар ине, улар һөйләне. Бына хәҙер мин һиңә ул турала һөйләйем. Алла теләһә һин дә ейәндәреңә һөйләрһең. Тарих ул, ошо рәүешле, быуындан-быуынға күсә килгәндә генә онотолмай.

- Олатай...

- Әү!

- Һине ҡаҙаҡтар араһында булып ҡайтҡан, тиҙәр...

- Булдым, балаҡай. Ирекһеҙҙән булырға тура килде...

- Һөйлә әле, ҡалайыраҡ барып тарыныҡ үҙҙәренә?

- Ҡалайыраҡ, тиһең инде...

Ғәббәс бабай башлағанын әйтеп бөтөрә алманы, ошо мәл тынҡ итеп ҡалған тупаҫ тауыш уның һүҙен бүлдерҙе. Олатай менән ейән йылп бороолоп шул яҡҡа ҡарай һалдылар. Ә унда йөҙйәшәр ҡарағас олонона ҡаҙалған ерән ҡауырыйлы уҡ һелкенә ине. Ғәббәс ҡарттың кинәт аяғүрә баҫҡанын күргән Ғайса ла һикереп тормаҡсы ине, әммә башына килтереп һуғылыуҙан бар донъя тыңҡәрелеп китте лә, билдәһеҙлек упҡынына осто. Уның аңына бары әкрен-әкрен генә йыйыла барғаны уйылып ҡалды, арьяғын иҫләмәй...

* * *

Аяуһыҙ ҡаҡлығыуҙан һушына килеп, күҙҙәрен асҡан Ғайсаның бөтә тәне ныҡ һыҙлай, күңеле болғана ине. Айырата үлтереп башы зыңҡый ҙа, муйыны ауырта. Һәр һелкенеүҙән әйтеп бөткөһөҙ ғазаптар кисерәкисерә салҡан ятҡан малай төштәрен ҡыҫып түҙергә мәжбүр. Өҙләкһеҙ ҡыптырлаған тауышты самалағанда арбала китеп бара һымаҡ. Хәлһеҙ үсмер ауырайған күҙ ҡабаҡтарын көскә-көскә ҡалҡытып, күк йөҙөнә баҡты. Ана, ике яҡлап ҡайын менән ҡарағас остары үтеп киткеләй, уларынан өҫтәрәк аҡ бөҙрәле болоттар эленеп тора. Ә тигеҙһеҙ юлда яман һелкетә һәм сайҡалған арба ынғайына хәлһеҙ кәүҙәне ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла ташлай.

Ҡайҙа китеп барыуы уның ошолай? Нинә китеп бара? Бер ни төшөнә алмаған Ғайса ятҡан урынынан ҡалҡынмаҡсы итә, әммә булдыра алмай: ҡуҙғалырлыҡ та әмәле юҡ. Бәкһаң, аяҡҡулдары таҡырайтып бәйләнгән икән. Ҡапылғара зиһене яктырып киткән малайға ошо урында аң ҡайта: уны дала баҫҡынсылары урлаған! Тап шулай, ана, былау менән йәнәш барған һыбайлылар үҙҙәренсә мөңгөр-мөңгөр килеп, ни тураһындалыр һөйләшә. Ара-тирә хатта, урман яңғыратҡансы көләшеп тә алалар. Күренеп тора - улар ҡәнәғәт. Эштәре уңған, кәйефтәре шәп. Яһилдар!

Аңҡы-тиңке ятҡан үсмер уларҙың һынар һүҙен дә аңламай. Аңлар ҙа ине ,башынан тәкәт юҡ - ныҡ сатнай. Ҡолаҡтары геүләп тора, күҙҙәре шекәрәләнеүҙән йүнләп бер ни ҙә күрә алмай. Шулай бара торғас, уңлы-һуллы уҙған ағас остары бер заман күренмәҫ булды. Юлы ла һиҙелерлек таҡырая төштө. Ирәндекте үтеп, ялан ергә аяҡ баҫтыҡ, буғай, тип бошондо Ғайса. Хушығыҙ, тыуған яҡтар!

Ни аралалыр ойоп киткән Ғайса шаптырлаған һыу тауышына һиҫкәнеп уянды һәм шул әҙере, бар булмышын рәхәтләндереп, арҡаһына һалҡынлыҡ эркелде. Күрәһең, тәрән генә йылғаны сыҡтылар. Йылға еләҫе ҡағылыуҙан уның тын юлдары иркенәйеп китте. Түҙанлы юл менән томра көн ҡайнарлығы ифрат йонсотҡан Ғайса бермә-бер еңеллек тойғоһо кисерҙе.

Пар ат егелгән былау эре таштар араһынан шағыр-шоғор үтте лә туктап ҡалды. Шул әҙере арба тирәһенә, лауылдашып, ҡыҫыҡ күҙле әҙәмдәр йыйыла һалды. Тәнеңә батып инеүҙән ҡанын ойотҡан арҡанды тағатып Ғайсаны аяғына баҫтырҙылар. Уныһы, башы әйләнеүҙән, саҡҡа ҡолап китмәй тора. Үсмер ҡаршыһына килеп баҫҡан һалбыр мыйыҡлы хөштөмһөҙ әҙмәүер, оло мисҡә доңғорҙағандағы тауыш сығарып, үҙҙәре телендә ниҙер әйтте. Уның бер һүҙен дә төшөнә алмаған Ғайса, гүйә, ярҙам һорап, әҙмәүер йәнәшәһендә торған баҫыр битле иргә ҡараны. Ә тегеһе тәржемәсе икән.

- Ҫинә нисә йәш? - ул башҡорт һөйләшен вата-емерә мөңгөрҙәне.

- Ун дүртенсе йәйем.

- Хоп! - Табаҡ йөҙө йәйелеп киткән мыйыҡ ҡәнәғәт йылмайҙы.

- Атың кем?

- Бәләкәстән Ғайса тиҙәр...

Ахыры, бәйғәмбәр исемен ишетеп, ҡапыл-ҡара етди төҫ алған баҡыр бит һалбыр мыйыҡ ҡолағына ниҙер шыбырланы. Уныһы, былай ҙа йәмһеҙ йөҙөн тағы нығыраҡ йәмерәйтеп, шул әҙере йылмайыуҙан туҡтаны. Башҡаса төпсөнөп торманылар. Йылға буйындағы һирәк-һаяҡ күренгеләгән сыбыҡ-сабыҡты йыйып, ут тоҡандырғандан һуң кипкән ат тиҙәге өҫтәнеләр. Геүләп яна башлаған усаҡ өҫтөнә йәтеш кенә ҡаҙан аҫылды: тамаҡ ялғап алырға уйлайҙар икән. Инде тамам асылына ҡайтҡан Ғайсала тамаҡ ҡайғыһы юҡ. Ул асырғанып ян-яғына ҡарана. Уға ошо миңырбанһыҙ әҙәмдәрҙән нисек тә ҡасып ҡотолорға кәрәк. Был юлы ҡотолоп булмаһа ла, һис юғында, юлды хәтерләп барғанда...

Әле кискән йылғалары киң генә, шулай ҙа ауырлыҡһыҙ йөҙөп сыҡҡандай. Яҡын-тирәлә, исмаһам, күләгә булырлыҡ бөртөк ағас күренһәсе. Ағасы нимә, хатта, йәшеренеп ышыҡлағандай бер убаһы ла юҡ. Тын ғына ағып ятҡан йылға ярының ашаһында ла, был ягындағы кеүек үк, типтигеҙ ерҙәр йәйрәп ята. Уның өҫтөндә елгә бәүелеп ултырған сал ҡылғандан башҡа бер ни күренмәй: дала тип һөйләгәндәре, күрәһең, ошо булалыр...

Әлеге уйҙан Ғайсаның йөрәгә жыу итеп ҡала: ул бит ошо сите лә, ҡырыйы ла күренмәгән шыҡһыҙ даланың әсире. Ул барымтасыларға ҡаршы бер ни ҡыла алмаған ғажиз йән. Көсһәҙләгә быуып барған үсмерҙең тамағына ҡаты төйөр килеп тығыла, күҙҙәренә йәш эркелә. Уны алда яҙмыштың ниндәйе көтә? Тыуған төйәге менән яҡындарын ҡабат күрә алырмы? Әллә... Уф-ф, ниндәй аяныслы ғәҙелһеҙлек, хатта, ҡот осҡос ҡәбәхәтлек: уны, кеше һынлы кешене, ирекһеҙлән, урла ла ҡуйсы әле! Аҡылға һыймаған эш түгелме ошо? Аһ-һ, бөркөттәре иҫкәрткән ине лә баһа, аңламағандар! Тимәк, олатай менән ейәнгә ниндәй ҡурҡыныс янағанын бөркөттәре юғарынан күреп торған. Күргән дә ҡурсымаҡсы иткән, ә улар...

Аяҡ-ҡулы хәҙер бауҙан азат, әллә ошонда уҡ ҡасырға ла китергәме? Булмаҫтыр. Тап-таҡыр асыҡ урында ҡайҙа бараһың, һыбайлылар һә тигәнсе тотоп алаҫаҡ. Тотоп алырҙар ҙа ҡабат быуау һалырҙар. Унан, ана, Баҡыр бит тә, ике күҙен яҙлыҡтырмай күҙәтә, янынан һис китешмәй. Башҡалары ла һағалап ҡына тора кеүек. Әллә һыуға ғына ташланып... Юҡ! Үҙ-үҙенә ҡул һалыу ярағаң ғәмәл булмаҫ! Үҙенең

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺӘР ИРТӘ...

## яҡшы кәйефтә

■ Кәрәҙле телефондан оҙаҡ аралашыу организмға зыянлы булыуын, ә компьютер уйындары күҙгә кире йоғонто яһауын һәм психикаға ауыр тәьсир итеүен барыһы ла белә. Бынан тыш психологтар ял итергә киткән осорҙа барлыҡ донъя мәшәҡәттәрен өйҙә ҡалдырырға тәҡдим итә. Эштән тыш ваҡытта ла төрлө проблемалар хәл итергә маташһағыҙ, һеҙ башығыҙҙы ял иттермәйһегеҙ, тип иҫәпләй улар. Барлыҡ эштәрегеҙҙе компьютер һәм кәрәҙле телефонығыҙ менән бергә эш урынығыҙҙа ҡалдырып китегеҙ.

■ Тоҙһоҙ аштың бөтөнләй тәме юҡ кеүек. Шулай ҙа диетологтар был тәмләткесте артыҡ ҡулланырға кәңәш итмәй. Улар фекеренсә, организмға тәүлегенә 6 грамм тоҙ етеүенә ҡарамаҫтан, кеше көнөнә уртаса 10-30 грамм тоҙ ашай. Тоҙло аш-һыу тәм рецепторҙарын ҡуҙғытып, асығыу тойғоһон барлыҡҡа килтереү һәләтенә лә эйә. Һеҙәмтәлә, артыҡ ашау һимереүгә килтерә, тимәк, таяныу-хәрәкәт аппаратына һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына көс төшә. Ашты артыҡ тоҙлап ашау шешенеүгә, артериаль ҡан баҫымының күтәрелеүенә булышлыҡ итеүе бар.

■ Көн уңышлы үтһен өсөн һәр иртәне яҡшы кәйеф менән ҡаршыларға кәрәк. Музыка терапияһының көсөргәнешлекте бөтөрөүе һәм һаулыҡҡа ыңғай тәьсир итеүе билдәле. Эшкә йыйынғанда ғына түгел, өй йыйыштырғанда ла яратҡан көйөгөҙҙө тыңлағыҙ. Көн дауамында ҡабул ителгән аҙыҡтарҙың иң мөһиме - иртәнге аш. Иртән сәләмәт аҙыҡ ашау ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә һәм организмға кәрәкле туҡлыҡлы матдәләр бирә. Шуға ла иртән ҡәһүә һәм тәм-том менән сикләнмәгеҙ, ә етерлек кимәлдә аҡһым һәм емеш-еләк ашағыҙ. Йәшел сәйҙә антиоксиданттарға бай, йоҡонан торғас та бер сынаяҡ йәшел сәй эсеү организмды кәрәкле матдәләр менән байыта.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуыҡ юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Бөгөн сәләмәт тормош алып барыусылар араһында йога киң таралған. Америка Ҡушма Штаттарында йога менән яҡынса - 15,8 млн, Бөйөк Британияла 460 мең кеше шөғөлләнә. Көнөнә йога менән 30 минут ҡына шөғөлләнеү ҙә хәтерҙе, стресҡа ҡаршы тороусанлыҡты яҡшырта, хәүеф тойғоһон түбәнәйтә. Бынан тыш, төрлө күнегеүҙәр йоҡоһоҙлоҡтан, баш ауыртыуынан ҡотҡара, ҡан баҫымын яйларға булышлыҡ итә. Рәсми статистика күрһәтеүенсә, йога менән даими шөғөлләнеү һалҡын тейҙереп ауырыу осрағын 40 процентҡа түбәнәйтә.

ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# ИШАН ИСЕМЕНДӘГЕ МӘСЕТ

**Бына инде биш йылдан ашыу Көйөргәҙе районының Илкәнәй ауылында "Ғиләжетдин" тигән исемде йөрөтәсәк мәсет төҙөлөшө бара. Төҙөлөштө ауыл халҡы үҙ көсөнә һәм үҙ аҡсаһына күтәрә, ә мәсеткә исемде ауыл зыяратында ерләнгән Ғиләжетдин ишан рухы, уның изге эштәре һәм ауыл халҡы һаҡлаған оло ихтирам бирә.**

1901 йылда Ырымбур ҡалаһында Г.И.Кәримов типографияһында "Мәрҫиә хәҙрәт Сәхиулла әл-Жиргәни мән нәхийәтә Әстәрлетәмаҡи" исемле иҫке төрки телендә ғәрәп яҙмалы баҫма китап сығарыла. Был мәрҫиәләр (йәғни, ғәрәпсәнән тәржемә итһәк, үлгән кешене данлап яҙылған шиғри әҫәр) бер нисә кеше тарафынан яҙылған була. Был китапта Ғиләжетдин ишан турабай, Илкәнәй зыяратында Ғиләжетдин исемле әүлиәнең ҡәбере бар, һеҙҙең бәхәсте уның рухы туҡтатҡандыр, тип аңлата.

һында айырым бүлек бар. Унда ишанды "әш-шәйх әш-шуйәх", йәғни, шәйехтәрҙең шәйехе, тип атап, уның Илкәнәй ауылының муллаһы (имам-хатибы) икәнлеге әйтелә.

Илкәнәй ауылынан 7 саҡрым алыҫлыкта урынлашҡан Йомағужа ауылы килене, башҡорт теле уҡытыусыһы Гөлсәсәк Әмирова Ғиләжетдин ишанға бәйле бер ваҡиғаны аптырап һөйләй. Бынан егерме йылдар элек Яңы йыл шыршыһында уға Ҡарһылыу булырға тәҡдим итәләр. Кисәлә кейергә аҡ күлдәк тапмағас, йәш уҡытыусы тормош иптәше Фәрғәт менән күрше Илкәнәйгә юллана. Ҡышҡы ауыр, бормалы юлда һыҙға килешеп, бәхәсләшеп китәләр. Ҡапыл асыҡ итеп, саф башҡортса "Балалар, бушҡа әрләшмәгеҙ, бәхәсегеҙҙе туҡтатығыҙ", тигән ҡәтғи, әммә ягымлы тауыш яңғырай. Фәрғәт машинаһын туктата ла Гөлсәсәкҡә ҡарай - тегеһе ҡурҡышынан ап-аҡ булған, әле генә уттар сәскән телен йотҡандай, тынып ҡалған. Машинанан сығып, тирә-яҡҡа ҡараһалар, Илкәнәй ауылының зыяраты тапҡырында туҡтағандар икән, әммә тирә-яҡта бер йән эйәһе лә юҡ. Йомоштарын үтәп, Йомағужаға ҡайтҡас, был ваҡиға тураһында Гөлсәсәктең атаһына һөйләйҙәр. Ба-

Ырымбурҙа сыҡҡан китапта Нәҡшбәндиә тәриҡәтенең сылбыры бирелә. Ул Мөхәммәт бәйғәмбәр исеме менән башланып, унан һуң Әбү Бәкер Сиддыҡ, Сәлмән әл Фарси, хужа Баһаутдин (йәғни Баһауетдин Мөхәммәт Нәҡшбәнди - Нәҡшбәндийә суфый ордена нигеҙ һалыусы) һәм башҡа исемдәр әйтелә. "Киске Өфө"нөң хөрмәтле уҡыусыларына ошо сылбырҙың һуңғы дүрт быуынын килтерәбеҙ:

*Дәхи Жиргәни Тулунғужа*
*Рәхмәтулла гәлиәгә*
*Урмани Мөхәмәтшәриф хәзрәтенә*
*Дәхи етте Илкәнәй Ғиләжетдин*
*хәзрәтләренә*
*Андин калды Сәхиулла хәзрәтенә*

Әлеге мәрҫиәләр китабы Сәхиулла хәҙрәткә арнап яҙылған. Был китап буйынса ул Ғиләжетдин хәҙрәттең шәкерте булып сыға. Ә үрҙә әйтелгән Жиргәни Толонғужа Рәхмәтулла Сәхиулла хәҙрәттең атаһы. 1859 йылғы ревизия яҙмалары буйынса Сәхиулла хәҙрәт указной мулла итеп күрһәтелә, ул Арыҫлан (хәҙерге Мәләүез районы) ауылынан, фамилияһы-Бураҡанов. Тимәк, Кинйә Арыҫлановтың атаһы, улыҫ старшинаһы Арыҫлан Аҡҡулов нигеҙ һалған һәм уның исемен йөрөткән ҡыпсаҡ ырыуы вәкилдәре йәшәгән башҡорт ауылынан ике күренекле дини шәхес сыҡҡан.

Илкәнәй ауылына нигеҙ һалынғас (рәсми мәғлүмәттәр буйынса 1837 йыл), Ғиләжетдин хәҙрәт (1824-1890) ошо ауылға тамъяндарҙың Иҙел буйы Мусаһынан (хәҙерге Мәләүез районы) күсеп килә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлеге көнгә Ғиләжетдин хәҙрәттең ҡайҙа уҡығаны тураһында документтар табылмаған. Ишанға замандаштары тарафынан күрһәтелгән оло хөрмәттең дәлиле булып, ул1890 йылдың 4 майында вафат булғас, хәҙерге Мәләүез районының Ергән ауылында тыуған ир балаларҙың күбеһенә Ғиләжетдин тигән исем биреү тора. Ырымбурҙа баҫылған мәрҫиәләр китабында хәҙрәткә төрлө тарафтарҙан килеп, ауырыу кешеләрҙең шифа алып, дауаланып ҡайтыуҙары тураһында яҙыла. Уларҙың һәр береһе берәй мал алып килгән. Ғиләжетдин хәҙрәт был килгән малды дин юлында сарыф иткән, бик күп китаптар һатып алған, Илкәнәй ауылында мәсет төҙәткән. Китапта "Тик рөхсәт алмай хөкем рус рәсмидән шуның өсөн мәхү итте (юҡҡа сығарҙы) аны мәсет исеменән" тип әйтеп кителә. Тимәк, мәсетте төҙөп бөткәс, унда мулла булып йөрөргә, ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында рус хәкимиәте тарафынан рөхсәт булмай.

Бәлки, бында Ғиләжетдин хәҙрәттең Нәҡшбәндийә тәриҡәтен таратыуы ла сәбәп булғандыр. Билдәле булыуынса, шәйх Зәйнулла Рәсүлевты Нәҡшбәндиә тәриҡәтен таратҡан өсөн хатта төрмәләргә ябып ҡуялар. Был 1870 йылдарҙа була. Ә Илкәнәй ауылында мәсет шулай уҡ 1870 йылдарҙа төҙөлгән була. Ғиләжетдин ишандың Ырымбур Ҡарғалыһында тағы бер мәсет һалдырғаны билдәле. Әлеге мәрҫиәләр китабында уның исеме Уральск, Ырымбур, Ҡарғалыла абруйлы булған, тип яҙыла.

Ғиләжетдин хәҙрәттең ике ҡатыны була, тәүге ҡатыны Әминә Ялчина вафат булғас, ул икенсегә, Йәмилә Ильясоваға өйләнә. Ике ҡатындан алты ул атаһы булыу бәхете тейә. Ишандың Абдрахман исемле, Абдрахмандың Зәйнулла исемле улынан һәм Хәйерниса

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИҢ ЯҠШЫ КӨНДӘР

## 16 октябрҙән һижри 1433 йылдың зөлхизә айы башланды

**Ибн Ғәббәс риүәйәтендә шулай тиелә: "Бәйғәмбәребеҙ, Аллаһы Тәғәлә өсөн зөлхизә айының тәүге ун көнөндә эшләнгән изге эштәрҙән дә яҡшыраҡтары юҡ, тине. Унан: "Аллаһ юлында көрәштән дә яҡшыраҡмы?" - тип һоранылар. Ул: "Эйе, хатта был изге көрәштән дә яҡшыраҡ, әгәр ошо маҡсатта юлға сығыусы ғүмере һәм мөлкәте менән фиҙа ҡылып та, өйөнә икеһен дә алып ҡайтмаған осраҡтан башҡа".**

Джабир исемле сәхәбә Бәйғәмбәрҙең, был донъяның иң яҡшы көндәре - ошо ун көн, тигәнен хәбәр итә. Ғалимдар аңлатыуынса, зөлхизә айының тәүге ун көнөндә бындай хөрмәт күрһәтелеүенә намаҙ, ураҙа, саҙаҡа, хаж кеүек ғибәҙәттәрҙең бергә үтәлеүе сәбәпсе. Был айға мосолмандарҙың иң мөһим байрамдарының береһе булған Ҡорбан ғәйете, хаж ҡылыу тура килә. Изге көндәрҙең береһе булған Ғәрәфә көнө лә ошо айҙа. Хәҙистәрҙә әйтелеүенсә, кем ошо көндә һәр береһен "Бисмилләһтән" башлап 1000 тапҡыр "Ихлас" сүрәһен уҡый, уға бар гонаһтары ғәфү ителә. Шулай уҡ ошо көндәрҙә зекерҙәр, тәкбирҙәр йыш әйтелә һәм ҡорбан салына.

Хәҙистәрҙә шулай уҡ ошо айҙың тәүге 9 көнөндә ураҙа тотоуҙың әжере ҙур булыуы тураһында бәйән ителә. Ғәйшә (раҙыяллаһу ғәнһү) бер үҫмер хаҡында шуны риүәйәт итә. Йәш егет 9 көн дауамында ураҙа тотор була. Бәйғәмбәргә был турала әйтәләр. Егет, хажға килеүселәрҙең доғаһының бәрәкәтен алырға уйлайым, тип әйтә. Шул ваҡыт Бәйғәмбәр, ошо көндәрҙең һәр береһендә тотҡан ураҙа өсөн кеше 100 ҡолдо азат итеүгә, 100 малды саҙаҡа итеп таратыуға һәм Аллаһы Тәғәлә юлында көрәшкә100 атты биреүгә тиң сауап ала, тигән. Ә Ғәрәфә көнөндәге ураҙа өсөн (зөлхизә айының 9-сы көнө, Ҡорбан ғәйетенән бер көн алда) 200 ҡолдо азат итеүгә, шунса малды саҙаҡа итеп таратыуға һәм шунсама атты изге юлға тапшырыуға тиң сауап алаҫағы тураһында әйткән. Шулай уҡ хәҙистәрҙә Ғәрәфә көнөндәге ураҙа ике йыл тотҡан нәфел ураҙаның сауабына тиң булыуы тураһында әйтелә. Кем ошо көндә ғибәҙәт үтәй, уға үткән һәм киләсәк йылдың гонаһтары ярлыҡана.

**Ошо ун көн эсендә:**

● Саҙаҡа биреү бөтә бәйғәмбәрҙәргә саҙаҡа биреүгә тиң.

● Сирлененң хәлен белеү бар әүлиәләрҙең хәлен белеүгә тиң.

● Йыназа намаҙында ҡатнашыу Аллаһ юлында ғүмерҙәрен фиҙа ҡылған бар шәһиттәргә йыназа уҡыуға тиң.

● Кем ысын йөрәктән Аллаға инаныусыға кейем бирә, уның үҙен Аллаһы Тәғәлә иң матур кейем менән бүләкләй

● Етемгә мәрхәмәт күрһәтеүсегә Аллаһы Тәғәлә Ҡиәмәт көнөндә мәрхәмәт күрһәтәсәк.

● Дини дәрес алыу бөтә бәйғәмбәрҙәр үткәргән дин дәрестәрен алыуға тиң.

✓ ***Малай илай башлағас, "Илама, бесән кире тороп ултырҙы бит инде", тигән тауыш ишетә. Ҡараһа, эргәһендә аҡтан кейенгән бер ҡарт тора, ул арбаны таяғы менән кире торғоҙоп ултыртҡан икән.***

исемле ҡыҙынан ҡалған тамыр-тоҡомдары Илкәнәйҙә бөгөн дә имен-аман, лайыҡлы көн күрәләр. Хәйерниса апайҙың, Зәйнулланың тормош иптәше Мәймүнә апайҙың, Илкәнәй ауылы аҡһаҡалдары Абдулхаҡ Әхтәмов, Марат Рамаҙановтарҙың төрлө йылдарҙа һөйләнгән хәтирәләре буйынса, Ғиләжетдин ишандың ысын әүлиә, ғалим, имсе, табип булыуы асыҡлана.

Ғиләжетдин ишандың оҙон таяғы була (таяҡтың оҙонлоғо дәрәжәгә ҡарап бирелә), ул ошо таяғы менән төрлө мөғжизәләр күрһәткән. Был таяҡты ишандың бүләһе Әнүр ағай Ғиләжетдинов Мәләүез мәсетенә тапшыра, әммә бөгөнгә көндә ул юғалған.

Ишан үҙе гүр эйәһе булһа ла, граждандар һуғышы ваҡытында ауыл халҡының рухы аҡтарҙан да, ҡыҙылдарҙан да һаҡлаған; баҫҡынсылар ауылға яҡынайыуға йә күҙ күрмәҫлек томан яткан, йә кисә алмаҫлыҡ ташҡын ҡалҡҡан.

Мәймүнә апайҙың өлкән улы Зиннур бала сағында бесән тейәп ҡайтып килгәндә, арбаһы батҡаҡлы ерҙә ауа. Малай илай башлағас, "Илама, бесән кире тороп ултырҙы бит инде", тигән тауыш ишетә. Ҡараһа, эргәһендә аҡтан кейенгән бер ҡарт тора, ул арбаны таяғы менән кире торғоҙоп ултыртҡан икән.

Мәймүнә апай һуғыш ваҡытында көтөү көткән була. Илкәнәй ауылы тирәһе һаҙлыҡ. Көтөүҙәге бер башмаҡ һаҙға бата башлай. Апай ишан рухынан шул тиклем ялбарып ярҙам һорай, сөнки өйөндә дүрт кескәй генә балаһы көтә, ә ире һуғышта. Әгәр ҙә башмағы батһа, алдағы көнөндә нимәләр булыуы билдәһеҙ. Доға ҡылып бөтөүенә, күтәрелеп ҡараһа, ер тигеҙләнеп, башмағы һаҙлыҡтан атлап килеп сыға.

Тағы бер мөғжизә: былтыр көҙгә һалҡын көндәрҙең береһендә мәсет стенаһын һалыу буйынса өмә үткәрәбеҙ. Шәфҡәт Әхтәмов, Ғәфүрйән Ишҡолов исемле ташсыларыбыҙ йылдам эшләй, әммә кирбес самалы. Минең зиһенде иртәнән бирле кирбес ҡытлығы борсой. Бер мәл төҙөлөш эргәһенә "Ланд Крузер" маркалы енел машина елдереп килеп туҡтаны ла, унан Өфөлә йәшәгән Көйөргәҙе районы эшҡыуары Иршат Аҫылгужин төштө. Шул уҡ минутта һис ни уйламай ғына мәсет эргәһенә килеп туҡтаған Иршат Мөхәррәм улы кирбес мәсьәләһен хәл итеп тә ҡуйҙы.

Фытыр хәйеренә, ауыл халҡы пенсияһын тартып-йыртып бүлеп биргән аҡсаға ғына, әлбиттә, мәсет төҙөп булмай. Был мөһим эште яйға һалыу, тиҙләтеү маҡсатында 2011 йылдың сентябрендә Илкәнәй ауылының урындағы мосолман дини ойошмаһын төҙөргә тотондоҡ. Урал Нуриев исемле ауылдашыбыҙҙың тырышлығы менән устав ҡабул итеп, ойошманы теркәп, бөгөн эште дауам итәбеҙ. Беҙҙең изге эште хуплап, аҙмы-күпме аҡсалата ярҙам итеүсе яҡташтарыбыҙҙың барыһына ла рәхмәтлебеҙ.

Ҡайһы бер замандаштар, ауылдаштар "Мәсет кемгә кәрәк, барыбер буш тора", тип, Аллаһы Тәғәлә, иман йортон төҙөүгә ҡаршы төшәләр. Минеңсә, был фекер ҙур хата булып тора. 21-се быуат кешелек, айырыуса йәштәр алдында, ҙур мөмкинлектәр генә түгел, ә ҙур ҡурҡыныстар ҙа ҡуя. Сөнки кешелек хәҙер икһеҙ-сикһеҙ мәғлүмәт дарьяларында йөҙә. Тормош тәжрибәһе, белеме, ышаныслы көнәшселәре булмаған йәштәргә, әлбиттә, был дарьяла уңышлы йөҙөү икеле. Бөгөнгө мәғлүмәт дарьяһында әхләки сикләнеүҙәр белмәй, теләкте шаштыра, нәфсене ҡоторта, саманы оноттора. Ауылдарҙа, айырыуса бәләкәй ауылдарҙа, мәктәптәрҙең күпләп ябылыуы ла был дарьяның сиктәрен киңәйтә.

Быуаттар һынауын үткән дин, айырыуса Ислам дине йәш быуын зиһененә мәғлүмәтте әхлаҡи ҡанундар иләгәнән үткәреп, иманлы итеп, сама менән һеңдерә. Беҙгә, оло быуын вәкилдәренә, 75 йыл буйы диндән айырылған, аллаһыҙлыҡ (тимәк, йүгәнһеҙлек, өмөтһөҙлек) ҡанға һеңгән бахырҙарға ла Аллаға ышаныуҙың көсөнә, уның йылыһына һәм яҡтыһына ынтылыу мотлаҡ кәрәк. Шуға, яңы Рәсәй халҡы дингә ынтылған, дингә һыйынған осорҙа, беҙ, башҡорттар, ситтә ҡала алмайбыҙ. Матди юғалтыуҙарға, эшһеҙлеккә, өмөтһөҙлөккә рухи бушлыҡ өҫтәлһә, бөгөнгөбөҙ ауыр, киләсәгебеҙ аяныслы буласаҡ.

**Светлана ИСКӘНДӘРОВА,**
**Ғиләжетдин ишандың тыуасары.**
**Тимер НИӘТШИН, шағир.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Нисек бай һәм етеш йәшәргә?

Байлыҡты төрлө кеше төрлөсә аңлай. Бизнес өлкәһе вәкиле өсөн ул - 50 миллион доллар саф табышты, тормоштоң рухи аспекттарына ынтылған кеше өсөн ул күңел тыныслығын һәм рухи донъяның барлығына тәрән инаныуҙы аңлата. Кешеләр барыбер теге йәки был байлыҡҡа ынтыла, шуға күрә уға эйә булыу өсөн ваҡыт һынауын үткән бер нисә мөлгә туҡталмаҡсымын.

Хыялды ысынбарлыҡ итеү йүнәлешендә һеҙҙең өсөн байлыҡтың нимә аңлатыуын аныҡ күҙаллау тора. Тормоштан нимә көтәһегеҙ? Онотмағыҙ, бәхет - тәғәйенләнгән урындың һуңғы нөктәһе түгел, ә тормош юлы буйлап сәйәхәт итеү ул. Уңыш ҡаҙанған күптәрҙең биографияһы менән танышып, уларҙың байлыҡҡа һәм уңышҡа табан барған юлдың башында торғанда иң бәхетле мәл кисереүҙәрен асыҡланым. Ул ваҡытта улар төрлө инаныуҙарға ҡаршы торған, үҙҙәрендә уңыш ҡаҙаныуҙың көслө теләген тойған һәм көслө амбицияға эйә булған. Үҙегеҙ өсөн ҡарар ҡабул итеп, тап бөгөн бәхетле булығыҙ.

Икенсе аҙым -бай кеше аңын барлыҡҡа килтереү. Бай булыу өсөн һеҙ байҙарса уйларға тейешһегеҙ. Һәр уңышлы эштәге кеүек үк, барыһы ла һеҙҙең аңығыҙҙан башлана, сөнки тышҡы донъя - эске донъяның сағылышы ғына ул. Төпкө аңығыҙҙа йоҡомһорап ятҡан йәшерен тылсымлы көстәрҙе азат итегеҙ. Төпкө аң, аҡыл ышаныс аша ҡабат уяна. Ул үҙ-үҙегеҙҙе инандырыуға, уйҙағы образдарға ла яуап бирә. Тормошоғоҙҙа байлыҡтың мөһимлеген сағылдырған фразаларҙы даими ҡабатлап, тиҙҙән һеҙ бай кешенең рухи торошона инерһегеҙ. Былдай торош алдығыҙҙа булған супер маҡсат йүнәлешендә әтәргес көс буласаҡ. Байлыҡ, бәхет, тыныслыҡ хаҡында уйлағанда һеҙ төпкө аңығыҙҙың тиңе булмаған көсөн эшкә егәһегеҙ. Тап шул ваҡытта тормошоғоҙ ябай кимәлдән ғәҙәти булмаған бейеклеккә күтәрелә.

**Хыялығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн төпкө аңдың барлыҡ ҡеүәтен файҙаланыуға бер нисә стратегик кәңәш.**

- Быға тиклем өйрәнгән алымдар аша үҙегеҙҙе көсөргәнештән арындырығыҙ.
- 10 минут дауамында нимә теләйһегеҙ, шуны ентекле күҙаллағыҙ.
- Нимәгә өлгәшергә теләйһегеҙ һәм һөҙөмтәнең мотлаҡ килерен ҡысҡырып әйтегеҙ.

Көсөргәнештән ысынлап арынып, үҙегеҙҙе тыңлаһағыҙ, аңығыҙ барлыҡ теләктәрегеҙҙе ҡабул итәсәк. Улар өҫтөндә эшләй башлаясаҡ һәм уларҙы тормошҡа ашырға мәжбүр итәсәк. Бары тик уны аҡылығыҙҙы бәхетҡә өлгәшеүгә көйләгән кеүек күнектерегеҙ. Аңығыҙҙа матур киләсәгегеҙҙе көн һайын даими рәүештә ҡабат-ҡабат күҙаллағыҙ. Аңығыҙ баҡсаһына нимә сәсһәгеҙ, шул емеш бирәсәк. Уйҙағы күҙаллауығыҙҙа нимәне ысын тип күрһәгеҙ, ысынбарлыҡта шул алдығыҙға килер. Эмерсон бит "Кеше - көн дауамында үҙе тураһында нимә уйлай, шул ул" тип юҡҡа әйтмәгән. Шуға ла көн дауамында, "Мин үҙемә байлыҡ һәм уңыш тартам", "Көн һайын барлыҡ мөнәсәбәттәрҙә лә яҡшыра барам", тип ҡабатлағыҙ. Хыялығыҙҙан бер аҙым да ситкә китмәгеҙ. Барлыҡ хыялдарығыҙ тормошҡа ашыр. Әммә үҙегеҙ өсөн бер тапҡыр шуны танығыҙ: һеҙҙең аңығыҙ сикһеҙ энергия сығанағы булып тора.

**Робин ШАРМА.**

## ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Элекке ғәҙәттәр менән төштә көрәшәм

**Яңы туҡланыу режимына күсеүем йәшәүемдең башҡа өлкәләренә лә ҡағылды. Айырыуса төштәремдә яулап алды. Иттән баш тартыуҙың беренсе айынан һуң "кәтлитле" төштәр күрә башланым. Бер төрлө бешерелгән, бер үк кәтлиттәр керә төшөмә.**

... Ҡаҙандың эсендә гарнир менән уралған өс кәтлит ята. Улар ҙур, ҡыҙғылт-көрән, өҫтән әҙ генә көйөнкөрәгән. Үҙемде күрмәйем, ләкин ҡаҙан тап минең алдымда икәнен беләм. Ҡараңғылыҡ... Минән башҡа был күренештә бер кем дә ҡатнашмай. Тауыш та юҡ. Аңым ҡараңғылыҡтың бер өлөшө. Ҡыҙҙырылған иттең еҫен тоям. Ҡараңғылыҡтан айырылып, кәтлитте ауыҙ итергә теләйем. Һеләгәйҙәр аға... Ошо минутта ҡаҙан юғала, ә мин уянып китәм. Ҡыҙҙырылған иттең еҫен һаман да һиҙгәндәй булам. Тирә-яғыма бер аҙ ҡаранғас ҡына төш күргәнемде аңлап ҡалам...

Ауыҙҙа йыйылған шыйыҡсаны йотоп ебәрәм. Ул ҡуйы һәм ерәнгес. Шыйыҡсаның бер өлөшө мендәргә аҡҡан. Ошо секундта уҡ бер кәтлит бешереп ашар инем һымаҡ. "Кухняға йүгерәм. Һыуытҡысты асып, ит алам да, уны тиҙ-тиҙ генә ит турағыстан үткәреп, ҡаҙанға бешерергә һалам..." Ләкин быларҙың барыһын да мин аңымда эшләйем. Ә ысынында, мин һаман да түбәгә ҡарап ятам. "Кәтлит ҡыҙҙырырға..." - был уй һаман да тынғы бирмәй. Юҡ, мин быны эшләмәйәсәкмен. Боролам да, тағы йоҡлап китәм.

Төшөмә кергән кәтлиттәр, бифштекстар шундуҡ иҫкә килеп төштө. Тап шундайҙарҙы һикһәненсе йылдарҙа Иҫәнгилдәлә бешерә торғайнылар. Сибай мәктәп-интернатында директор булып эшләгәндә йыш ҡына төҙөлөш материалдары артынан водитель менән Өфөгә барып ҡайта торғайным. Юлдың яртыһын үткәс, беҙ мотлаҡ Иҫәнгилдәлә ашап сыға инек. Урындағы ашнаҡсылар бешергән иң тәмле ризыҡтарҙың береһе - йомортҡалы бифштекс. Ана шул бифштекстарҙың тәмен күҙ алдыма килтереп, һеләгәйҙәрем аға торғайны.

Өс ай буйы өс кәтлит керҙе төшөмә. Һуңынан ғына улар төҫөн юғалтып, юҡҡа сыҡты. Әммә кәтлиттәрҙе ҡыуғас, хәҙер улар урынына аңыма балыҡтар инеп ултырҙы.

### "Балыҡлы" төштәр

Мин гонаһлымын, ә гонаһтар өсөн ҡасан да булһа яуапҡа тарттырылаһың. Әлдә генә йәшәгән сағымда уҡ гонаһтарымдың бәләкәй өлөшөнән булһа ла таҙарыныу юлына баҫҡанмын - ит, балыҡ һәм йомортҡаһыҙ туҡланыу юлына. Минән балыҡтар бик күп хәсрәт кисерҙе. Үҙ йәштәштәрем араһында мин иң төп балыҡ үлтереүсе инем. Беҙ, малайҙар, Һаҡмар йылғаһын иңләп-буйлап күпләп балыҡ тота инек. Шуға күрә яҡташтарымды тыуған тәбиғәтте һаҡламауҙа һис ғәйепләй алмайым. Күп кенә яҙыусылар, ғалимдар халыҡты "яҡшы" булырға: спирты эсемлектәр эсмәҫкә, әхлаҡи яҡтан таҙа булырға, тыуған телде һәм тыуған төйәкте яратырға, һаҡларға өндәй, ләкин үҙҙәре был өлкәлә өлгө күрһәтәме? Мәҫәлән, мин халыҡҡа өгөт-нәсихәт уҡырға тырышмайым, сөнки үҙем дә ҡолаҡтан быҫраҡҡа батҡанмын. Шуға ла тәү сиратта үҙемде сыныҡтырып, камил йәшәү рәүешен тапҡас ҡына, кәңәштәремде халыҡҡа ла еткерермен, тип ниәтләйем. Әлбиттә, әгәр ҙә ундай камил йәшәү рәүеше булһа...

"Балыҡлы" төштәрем дә шул уҡ принципта ҡоролғайны. Күҙ алдымда Баймаҡ районы Көлсәр ауылы эргәһендәге йә икенсе бер урындағы Һаҡмар йылғаһы буйы. Һыу йылы, йәшелһыу төҫтә, ләкин үтә күренмәле. Йылға һай ғына булып ҡалған, һыуы әҙ. Эсендә ике-өс балыҡ күренә. Ҡайһы берҙә бер генә ҙур балыҡ йөҙә, имеш. Мин уға яҡынлашам һәм "һә" тигәнсе тотам. Ҡәнәғәтләнеү кисерәм. Тик бер аҙҙан балыҡтың тере булмағанын аңлайым: ҡурҡмай ҙа, йөҙмәй ҙә, ҡаршылыҡ та күрһәтмәй. Аҙаҡ уның йөҙгөстәре аҫтында шеш күреп ҡалам. Балыҡ үлек. Күп тә үтмәй, балыҡ ауыҙыма тула башлай. Сей балыҡтың серек еҫен тойоп, ҡоҫҡом килә, уянам...

Ун ете йыл буйы шундайыраҡ төштәр күрҙем. Ярты йыл элек кенә улар үҙгәрә башланы. Клиник үлем кисергән кешеләрҙе тыңлағас, Плутарх, Платон, Данте, Сведенборг, Даниил Андреевтың тамуҡ тураһындағы хеҙмәттәрен уҡығас, үлемдән һуң "йәшәү"ҙең механизмдарына төшөнә башланым.

"Балыҡлы" төштәр гел генә миңә шуны иҫкәртеп торҙо: "Йәш саҡтарыңда ҡылғандарыңдың күбеһе гонаһ булған. Шуларҙы ҡабатлама".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**



## 22 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Женский журнал"
09.15 "Жить здорово!" (12+)
10.25 "Контрольная закупка"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 6-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Развод", 5-я и 6-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.20 "Без свидетелей". Сериал (16+)
00.55 "Пропавший без вести" (16+)
01.40, 03.05 "Команда 49: огненная лестница" (16+)
03.00 Новости
03.55 "Следствие по телу" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Все будет хорошо!" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Сердце матери", 7-я и 8-я, закл. серии. Мелодраматический сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Одесса-мама", 1-3-я серии (12+)
00.20 "Городок"
01.15 "Девчата" (16+)
01.55 "Вести+"
02.20 "Горячая картошка". Боевик (16+)
